✔"Ни өсөн көнсөл кешеләр һәр ваҡыт кәйефһеҙ йөрөй?" тип һорағандар бер ваҡыт Аристотелдән. "Сөнки уларҙы үҙ уңышһыҙлыҡтары ғына түгел, ә башҡаларҙың уңыштары ла көйөндөрә", тип яуаплаған аҡыл эйәһе. Кәрәгенән артыҡ хәстәрлекте һәм көйәләнеүҙәрҙе йөкмәмәгеҙ иңегеҙгә, әйләнә-тирәгеҙҙәге кешеләргә лә өлөш сығарығыҙ. Бәлки, тап ошо өлөш уларҙы бәхетле итер.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7 - 13 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№1 (471)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт ҡыш бабайҙары...**

йәшел елән кейеп килгән



4

**Халыҡ баһаһы -**

баһаларҙың иң ҡәҙерлеһе...



6

**Аждаһаға гәйеп таҡмайыҡ,**



8-9 ул беҙҙә йотолоуҙан иҫкәртеүсе мифик зат...

**Аждаһа кеҫлө шәхестәргә ышанасаҡ,**

гәмәлен уларға ҡарап көйләйәсәк...



12-13

14 Календарь

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЗАМАН ТАЛАП ИТКӘН...

## сифаттарға эйә булайыҡ!



**Һүҙемде риүәйәттән башлайым. Донъя яратылған ғына мәлдә барлыҡ йән эйәләре бергә йыйылған урынға фәрештә килгән һәм ҡулындағы кәрзинен һоноп: "Бында һәр йән эйәһенең зауығына тап килгән барлыҡ сифаттар бар, кемгә ҡайһыһы оҡшай - шуны өләшеп алығыҙ", - тигән. Йән эйәләре кәрзингә ташланған һәм һәр береһе ундағы сифаттарҙан, холоҡ-ҡылыҡтарҙан өлөш эләктергән: төлкөгә - хәйләкәрлек, ҡуянға - түҙемлек һәм һаҡлыҡ, ҡырмыҫҡа һәм бал ҡорттарына - егәрлелек... Әммә был урынға иң һуңғы килеүсегә генә кәрзиндә бер сифат та тороп ҡалмаған. Ул һуңлап килеүсе кем булған, тип уйлайһығыҙ инде? Әлбиттә, кеше! Өлөшһөҙ тороп ҡалған кешегә фәрештә буш кәрзинен һонған һәм былай тигән:"Үҙең нимә теләйһең, ниндәй сифаттарға эйә булыуҙы хуп күрәһең, шулар менән тултыр был кәрзинде..." Ана шунан алып беҙ, кешеләр, ошо кәрзинде тултырыу менән мәшғүлбеҙ. Тик һәр кемдең кәрзине үҙенсә, үҙе теләгәнсә тултырыла. Ҡарағыҙ әле, һеҙҙең кәрзиндә ниҙәр бар икән?..**

Нимәгә ишаралай был аҡыл? Хәйер, уны төрлөсә лә бороп була торғандыр. Ә беҙ уны шулайыраҡ тәфсирләйек. Мәҫәлән... Яңы йыл байрамы көндәрендә йә түңәрәк кенә йәш үренә менеп баҫҡанда беҙ, ысынлап та, өлгәшелгән һәм өлгәшелмәгәндәргә йомғаҡ яһарға күнеккәнбеҙ. Әммә "Ниңә быныһына өлгәшелмәгән?" тигән һорауға яуап эҙләп, Хоҙай Тәғәлә тарафынан үҙебеҙгә тәғәйенләнгән "кәрзингә" күҙ һалып, ундағыларҙы барлап алыу тураһындағы уй башыбыҙға ла инеп сыҡмай. Ә бит был бөгөн бик мөһим гәмәл булыр ине. Беҙҙе аҙым һайын тетрәнеүҙәргә дусар иткән заман һынауҙарына ҡаршы тороу, уңышлы көн итеү, глобалләшеү тигән аждаһаға ҡалья булмау, тиңдәр араһында тиң булып һаҡланып ҡалыу ана шул "кәрзиндәге" сифаттарыбыҙға үтә лә бәйле бит, йәмәғәт.

Шундай бер танышым бар. Мин уның "кәрзинендә" ниҙәр барлығын бик яҡшы беләм шикелле. Иң мөһимдәрен генә барлайым. Уның иң төп сифаты - ихласлыҡ. Һәр һүҙҙе ысын күңелдән һөйләй, һәр эште йәне менән бирелеп башҡара, башҡаларҙы ла үҙе һымаҡ ҡабул итеп, уларҙан да ихласлыҡ талап итә. Яңылышыуын аңлап, һабаҡ алғандай ҙа була, әммә... Ихласлыҡты айырып алып булмай шул унан, шуға күрә башҡаларҙы ла үҙе кеүек ҡабул итеү, хаталаныуҙар дауам итә...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҠОТЛАЙБЫҘ!

# АЖДАҺА ЙЫЛЫ

*Төн уртаһы көн шикелле балҡып китте,*
*Ай тигәнем - күҙ сағылтыр таж даһа:*
*Күктән гәлсәр тәңкәләрен һибә-һибә,*
*Килеп еткән алтын тажлы Аждаһа.*

*Аждаһа, тип, шөләмтөрәп төшмәйексе,*
*Алда әле килер көндәр бар ҙаһа:*
*Ҡәҙерҙәрен белгәндәргә әкиәти таң,*
*Сихри кистәр алып килгән Аждаһа.*

*Таң менән төн - керпек асып йомған ара,*
*Бер-беренә әҙәм баҙҙар ҡаҙмаһа;*
*Кем өсөндөр ҡот осорғос Ҡәһҡәһәләр,*
*Кемдер өсөн изге йәндер Аждаһа.*

*Был донъяла ҡыл тибрәтер әмәл тапмай,*
*Үҙ тиреңә үҙең һыймай ажлаһаң,*
*Көндәреңде берәм-берәм йота-йота,*
*Утҡа һалып үтеп китер Аждаһа.*

*Көндәр, айҙар тыуып торһа - кинәнесем,*
*Иң ауыры - көткән таңдар яҙмаһа.*
*Әйләнеп тә йылдар елә, килә торһон,*
*Булғанда ла көтөлмәгән Аждаһа.*

**Сафуан ӘЛИБАЙ.**



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# МУЙЫЛДЫ ЛА...

## килем сығанағына әйләндереп була



**Үҙебеҙҙең матур ғына түгел, ә бай һәм мул тәбиғәтле төбәктә йәшәүебеҙҙе оноторға ярамай. Тәбиғәт беҙгә эстетик ләззәт кенә биреп ҡалмай, ә дөрөҫ ҡуллана белгәндә, кеҫәгә арыу ғына килем дә һала.**

Былтыр урман-ҡырҙарҙа төрлө емеш-еләктең күплеге хайран ҡалырлыҡ булды. Айырыуса муйыл емерелеп унды, ҡап-ҡара булып бешкән емештәренән хатта ағас олоно ла күренмәй ине. Бындай байлыҡты ҡулдан ысҡындырмай, һәр хужабикә буш ваҡытының бер минутын да сарыф итмәй, муйылды күпләп йыйып, ҡышҡылыҡҡа төйнәп ҡуйҙы. Бәлешкә һалыр өсөн эслек, һуттар, киптерелгән муйыл - барыһы ла әҙерләнде. Шулай ҙа емеште кәрәгенән артыҡ та һаҡлап булмай, ә муйылдар күҙҙе ҡыҙҙырып ултырыуҙарын белде. Йәйен-көҙөн беҙҙең район халҡы күрше ҡалаға емеш-еләген, баҡсаһында үҫкән йәшелсә-емеште күпләп алып барып һата. Быға тиклем муйыл һатыуҙарын ишеткәнем булмаһа ла, тәбиғәттең ошондай бай бүләген әрәм итмәҫкә һәм баҙарға сығарып ҡарарға булдым.

Шулай бер көн, 5 литрлыҡ биҙрәгә муйыл йыйып алдым да, Магнитогорск ҡалаһына юл тоттом. Май-һөт, бәшмәк-картуф һатҡан урынға килеп баҫтым да, бер стакан муйылға 10 һум хаҡ ҡуйып, һатып алыусыларымды көтә башланым. Улар оҙаҡ көттөрмәне. Тәүҙә бер ҡарт: "Бала сағымды хәтерләтә", - тип, 100 һумлыҡ муйыл алып китте. Унан һуң: "Ой, что за зверь?"- тип ҡыҙыҡһынып, емешемде йәш ҡатын һатып алды. Муйыл емештәренең ҡап-ҡара ғына булып йымылдашып ятыуын ул ниндәйҙер хайуанға оҡшатты, ахры. Бер һатып алыусы хатта алған муйылын нисек эшкәртәсәген, ниндәй бәлештәр бешерәсәген тәмләп-тәмләп һөйләп, бешереүгә ҡағылған ҡайһы бер серҙәре менән дә уртаҡлашты. Шулай итеп, оҙаҡ та тормай, алып килгән муйылымды һатып бөттөм. Һуңғы стаканды ғына алырға өлгөргән бер йәш егет: "Атайым муйыл ярата", - тип ҡулыма 500 һум аҡса тотторҙо ла, тағы ла йыйып алып килеүемде һораны. Минә, белмәгән-күрмәгән кешеһенә, шундай ышаныс күрһәтеүе аптыратты ла, һөйөндөрҙө лә. Күрше инәйҙең: "Городтың (беҙҙә Магнитогорск ҡалаһын "город" тип кенә йөрөтәләр) урыҫтары менән туғанлашып бөткәнбеҙ инде, яҡын да, ҡәҙерле лә беҙ бер-беребеҙгә", - тиеүе хаҡтыр, күрәһең. Егеттең ышанысын аҡлап, ике көн үтеүгә килешелгән урынға һәм ваҡытҡа тағы ла муйыл йыйып алып килеп, теге егеткә тапшырҙым.

Шулай итеп, өйгә терәлеп тиерлек үҫкән муйылдың мул уңышын файҙаланып, бер-ике аҙна эсендә арыу ғына аҡса эшләүгә өлгәштем. Икенсе йыл да, Алла бирһә, был шөғөлөмдө дауам итермен тип уйлайым, муйыл ғына уңһын.

**Сәриә ЗӘЙНУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЗАМАН ТАЛАП ИТКӘН...

## сифаттарға эйә булайыҡ!

**(Башы 1-се биттә).**

Икенсе сифаты - үтә ныҡ ярата ғәҙеллекте, дөрөҫлөктө. Донъя яртылаш ҡына дөрөҫлөк менән йәшәй, тигән ысынбарлыҡты ул бик ауыр ҡабул итә. "Нинә шулай икән был донъя?" - тигән һорауҙы йыш бирә үҙенә лә, кешеләргә лә. Ошо сифаты арҡаһында ул ҡайһы саҡ үҙенең яҡындарына ла түҙемһеҙлек күрһәтә, уларҙың бәләкәй генә хаталарын да кисерә алмай яфалана. Ҡулы ҡаушарыла ғәҙелһеҙлектәр менән осрашҡандан һуң, күңел төшөнкөлөгөнә бирелә...

Уның "кәрзинендә" тағы ла... талант ҙур урын алып тора. Унда моң, унда шиғри һүҙ, унда һығылмалыҡ, унда... Батырсылыҡ итеп майҙан уртаһына сыҡһа, бар донъяны хайран итерлек көскә, рухҡа эйә уның был таланты. Әммә уның үҙ-үҙенә артыҡ талапсанлығы, ҡайһы саҡта бошоп бармауы, үҙ-үҙен тейешенсә баһаламауы майҙан уртаһына сығыуға кәртә булып тора. Шуға ла майҙан түрен таланты менән унан ҡайтышыраҡтар биләй күберәк...

Матди донъя аҙ ҡыҙыҡтыра уны. Булғанына шөкөр итеп, нәфсеһен аҙындырмай йәшәргә күнеккән. Сәме бай кешеләргә ҡарап түгел, ә, әйткәнебеҙсә, ғәҙелһеҙлеккә ҡарап тоҡаныусан. Аҫыраған малын, үҫтергән йәшелсәһен дә хатта ярты хаҡын биреп ҡулынан тартып алып китә муттар. Хәләл көсө түгелгән хеҙмәте менән шулай ситтәрҙе матди байлыҡҡа эйә итә...

Таныныҡҙымы был кешене? Эйе, был беҙҙең милләттәш. Башҡорт кешеһе. Был сифаттар - башҡорттар "кәрзинендә". Ошо сифаттар арҡаһында ла башҡортто тәбиғәт балаһы тип йөрөтәләр, шуға ла ул Хоҙайға яҡын, шуға ла ул... Эйе, шуға ла уға бөгөнгө замандың һәм замандаштарҙың ҡырыҫлығына, ҡырҡа боролоштарына яраҡлашыуы бик ауыр. Ә яраҡлашырға кәрәк. Үҙ асылында ҡалып, булған холоҡҡылыҡтарынан, матур сифаттарынан яҙмай, шуларға өҫтәп заман талап иткән сифаттар менән дә тултыра башларға кәрәк уға баяғы "кәрзинен": тиҙ генә уйлап, тиҙ генә ҡарарҙар ҡылыу, ата-бабаларҙы туйындырған да, кейендергән дә шөғөлдәрҙе яңыртыу, сосораҡ, етеҙерәк ҡыланыу, тәүәккәллек талап ителгәндә "боҙло һыуға һикереү", үҙенең һәм балаларының яҙмышын үҙ ҡулына алыу һәм... Үҙ ер-һыуының, тыуған төйәгенең хужаһы булыу өсөн тағы ла бик күп сифаттарға эйә булаһы бар әле уға. "Кәрзиндә" урын бар әле, әйҙәгеҙ, заман сифаттарын да тирәйек, үҙләштерәйек, йәмәғәт!

**Гәлфиә ЯНБАЕВА.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘҮСЕ БАҪМА

**Хәҙер мәғлүмәт сығанаҡтары күп төрлөлөгө менән айырылып тора. Ваҡытлы матбуғаттан тыш, Интернет селтәренең киң йәйелеүе телгән һорауға яуап табырға, ҡыҙыҡһындырған һәр ваҡиға хаҡында белергә, донъяның төрлө мөйөшөндә ниндәй хәлдәр барыуы тураһында хәбәрҙар булырға мөмкинлек бирә. Ошондай мәғлүмәти төрлөлөк һәм иреклек араһында "Киске Өфө" гәзитенең үҙ урыны, үҙ булмышы, үҙ "характеры" бар.**

Эйе, минеңсә, гәзит-журналдар ҙа, кеше кеүек үк, төрлө яҙмышлы. Ҡайһылыр гәзит енел-елпе холоҡло кеше ише, улар ваҡыт үткәреү өсөн генә тәғәйенләнгәндәй, икенселәре енәйәтсене ҡәүҙәләндергән төҫлө, сөнки һәр битенән тик негатив ҡына сәселә һәм криминал яҡтыртыла, өсөнсөләре гәйбәтсене хәтерләтә - теге йәки был артистың, спортсының, сәйәсмәндең йәки башҡа шундай билдәле кешенең ғаиләһендә нимә булған, кем нимә әйткән һәм башҡа ошондай "сүп-сар" менән тулған. Улар араһында "Киске Өфө" гәзите үҙенең булмышы менән бөтөнләй айырылып тора. Үҙенә әҙәпле һәм мәҙәниәтле мәҡәләләр, аҡыллы фекерҙәр, киң диапазонлы диалог һәм монологтар, файҙалы кәңәш, идея һәм уйланыуҙар туплаған гәзиттең бер битендә лә "бит тултырырға кәрәк булған өсөн" генә ҡуйылған материал юҡ. Беренсе битенән һуңғыһына тиклем уҡыусыны көсөргәнештә тотоуы, мәҡәләләрҙең әйләнеп ҡайта-ҡайта уҡылыуы, донъя көткәндә һәр кемгә файҙаһы тейер кәңәштәрҙең һәм аҡыллы кешеләрҙең фекерҙәре баҫылыуы, тарихтың быға беҙ хатта уйлап та ҡарамаған тармаҡтарын яҡтыртыуы - барыһы ла гәзитте уҡымлы, хөрмәтле һәм көтөп алынған ваҡытлы матбуғат итә. Хикәйә-шиғырҙарҙың баҫылыуы, шулай уҡ балаларҙың һөйләгәне һәм башҡа ҡыҙыҡлы әйберҙәрҙең донъя күреүе күнелде күтәреп ебәрергә һәләтле. Гәзиттең 13-сө битендәге "Уныш ҡаҙан" бағанаһында Роберт Стоундың тәржемә итеп бирелгән яҙмалары ҡыҙыҡһыныуы уятты һәм китаптың үҙен алып уҡырға сәбәпсе булды.

Ғөмүмән әйткәндә, "Киске Өфө" һәр аҙна тормошҡа яңы һулыш өрөүсе, позитив тулҡындарҙа бөүелергә мәжбүр итеүсе һәм киләсәккә ныҡлы ышаныс менән ҡарарға мөмкинлек биреүсе баҫма.

**Ҡасим ХИЛАЛОВ.**
**Әбйәлил районы.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланып, уның йомғаҡтары билдәле булды. Әлбиттә, ул беҙҙе әллә ни ҡыуандырмай. Милләттәштәр барыбер ҙә беҙҙең өндәшеүҙе, оранды ишетеп етмәй әле. Әллә инде ишетеп тә битараф ҡала.**

Хәйер, һаңғырауҙар һәм битарафтар өсөн түгел баҫмабыҙ. Ә бына гәзитебеҙҙе үҙ итеп тә, уға яҙылырға һунлап йә онотоп ҡалыусылар барҙыр арағыҙҙа. Уларға әйтегеҙ, зинһар: 17 ғинуарға тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе февралдән алдыра башларҙар. Индекс шул уҡ - 50665, биш айға яҙылыу хаҡы - 290 һум 20 тин. Почта хеҙмәткәрҙәре менән гәзиткә яҙҙырыу йә гәзитте килтереү буйынса аңлашылмаусанлыҡтар килеп сыҡһа, редакцияға хәбәр итергә онотмағыҙ.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Бер юлы ике (игеҙәк) һәм унан күберәк балалары тыуған ғаиләләргә социаль ярҙам күрһәтеүҙең өҫтәмә саралары тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, 2012 йылдың 1 ғинуарынан бер юлы ике (игеҙәк) һәм унан күберәк балалары тыуған ғаиләләргә һәр сабыйға өс йәштәре тулғансы ай һайын 500 һум күләмендә балалар пособиеһы биреләсәк. Пособие Башҡортостанда даими йәшәгән, йән башына уртаса килеме йәшәү минимумының икеләтә дәүмәленән артмаған ғаиләләргә түләнә. Шулай уҡ указ 2012 йылдың 1 ғинуарынан бер юлы өс (өс игеҙәк) һәм унан күберәк балаһы тыуған һәм республиканың урындағы үҙидара органдарында торлаҡҡа мохтаждар исемлегендә торған ғаиләләргә торлаҡ сертификаттары бирелеүен гарантиялай.

✓Владимир Путиндың Өфөләге йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһе хеҙмәткәрҙәрен яңы етәксе менән таныштырҙылар. Дәүләт Думаһына депутат итеп һайланған Александр Дегтярев урынына был вазифаны "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк сәйәси советы секретары урынбаҫары, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Раил Әсәҙуллин биләне.

✓Федераль дәүләт статистикаһы хеҙмәте 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға тәүге йомғаҡ яһаны. Башҡортостанда халыҡ иҫәбе 32 мең кешегә кәмегән. 2010 йылдың 14 октябренә Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостан Республикаһында даими йәшәүсе халыҡ иҫәбе 4072292 кеше тәшкил итә. Мәскәү (11503,5 мең кеше), Мәскәү өлкәһе (7095,1 мең кеше), Краснодар крайы (5226,6 мең кеше), Санкт-Петербург (4879,6 мең кеше), Свердловск өлкәһе (4297,7 мең кеше) һәм Ростов өлкәһенән ҡала (4278 мең кеше) Рәсәй Федерацияһы субъекттары араһында халыҡ иҫәбе буйынса Башҡортостан етенсе урында килә. Волга буйы федераль округында халыҡ иҫәбе буйынса беҙ - лидер.

✓Башҡорт дәүләт университетының сығарылыш студенттарын эшкә урынлаштырыуға булышлыҡ итеү үҙәге 2011 йыл йомғаҡтары буйынса яҡшы эш һөҙөмтәләре өсөн Волга буйы федераль округының юғары уҡыу йорттары ректорҙары Советы тарафынан билдәләнде. Үҙәккә бындай баһа Удмурт дәүләт университетында үткән семинар-кәңәшмәлә бирелде.

✔ Нисек кенә булмаһын, мин интернетта баҫылған күп кенә материалдарҙа (энциклопедик белешмәләрҙән тыш) негативты күп күрәм, шуға күрә ундағы хәбәргә урамдағы ғәйбәт итеп ҡарайым.



ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠАҒЫҘ БИТЕНӘН УҠЫЙЫҠ!



**Һуңғы ваҡытта электрон сараларындағы, бигерәк тә интернет селтәрендәге мәғлүмәткә ҡарағанда, ҡағыҙ битендәге яҙма мәғлүмәттең әһәмиәтлерәк булыуы хаҡында күп кенә фекерҙәр әйтелә. Күптәр бында интернеттың бысраҡ һәм объектив булмаған хәбәр таратыусы ғәйбәт ояһын хәтерләтеүен дә сәбәп итеп килтерә. Ысынлап та, объективлыҡ йәһәтенән интернет гәзит-журналдан, китаптан күпкә ҡалыша. Ни өсөн? Шул хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Эйе, һүҙ юҡ, гәзит-журнал, китап, ғөмүмән, ҡағыҙға төшкән яҙма, һүҙ, мәғлүмәт - ул документ. Ә документҡа халыҡ ышана, был ышаныс уның күңеленә таш быуаттан башлап йөҙәр, меңәр йылдар буйына һалынған һәм һеңдерелгән. Беренсенән, ҡағыҙҙы, йәғни документты архивта һаҡлап, икенсенән, ул документ-дәлил нигеҙендә кемдәрҙе яуаплылыҡҡа тарттырып була, тимәк, был шарт ҡағыҙға ниндәйҙер һүҙ яҙыусының ул һүҙ, мәғлүмәт өсөн әхлаҡи яуаплылығын барлыҡҡа килтерә. Миненсә, ҡағыҙға яҙылған һүҙҙең объективлыҡҡа яҡын булыуы, хәҡиҡәт итеп ҡабул ителеүе ошо яуаплылыҡтан киләләр. Икенсенән, ҡағыҙға ҡултамғаңды ҡуйып була, унда һинең почерғың сағылыш таба, ә интернетта баҫылған мәҡәләнәң аҫтына теләһә кемдең фамилияһын ҡуйып та, уның исеме менән бар донъяға ялған мәғлүмәт таратып, бының менән ижтимағи фекер үҫешенә зыян килтереп тә була. Был шарт та шулай уҡ электрон сараларындағы һүҙ, мәғлүмәт өсөн яуаплылыҡты юҡҡа сығара. Өсөнсөнән, беҙҙең законсылар тарафынан әле һаман да интернет селтәрендәге ялған һәм башҡаларҙың йөҙөн йыртҡан бысраҡ мәғлүмәт таратҡан өсөн яуаплылыҡ критерийҙары билдәләнмәгән. Әйтәйек, интернеттағы сығышы өсөн кемдәрҙе яуаплылыҡҡа тарттырып, төрмәгә ултыртыуҙары йә ҙур суммала штраф һалыуҙары хаҡында ишеткәнем юҡ.

Дөрөҫ, интернеттың теге йәки был мәғлүмәтте тиҙ генә табыуҙа, Ер шарының һәр кешеһе менән бәйләнешкә инеүҙә роле баһалап бөткөһөҙ ҙур, был йәһәттән мәғлүмәт сығанағының был төрө кешелек йәмғиәте үҫешендә баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Интернет ярҙамында беҙ ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үҙебеҙгә кәрәкле мәғлүмәткә эйә булып, үҙебеҙҙең фекерҙе лә күҙ асып йомған арала бар донъяға тарата алабыҙ. Әммә унда инделгән мәғлүмәт өсөн яуаплылыҡтың булмауы ошо мөһим сараның иң ҙур етешһеҙлеген тәшкил итә лә инде.

Халыҡта "ташҡа яҙылған", "аҡҡа төшкән" тигән бик әһәмиәтле төшөнсәләр бар. Борон-борондан ташҡа яҙылған, аҡҡа төшкән мәғлүмәткә мәңгелек хәҡиҡәт итеп ышанып ҡарайҙар. Ә Интернетҡа килгәндә, ундағы донъя барыбер ҙә виртуаль һәм был донъяның ундай асылы мәғлүмәткә лә күсәләр, тим. Нисек кенә булмаһын, мин интернетта баҫылған күп кенә материалдарҙа (энциклопедик белешмәләрҙән тыш) негативты күп күрәм, шуға күрә ундағы хәбәргә урамдағы ғәйбәт итеп ҡарайым. Урамда ғәйбәт кешеләр араһын бутау, донъяны емереү, тыныслыҡты юҡҡа сығарыу өсөн таратыла бит. Интернет ярҙамында дәүләттәрҙе тарҡатырға, милләттәрҙе юҡ итергә, ҡыл да ҡыбырҙатмайынса, донъяның иң бай кешеһенә әүерелергә була хәҙерге заманда.

Ҡыҫҡаһы, аҡҡа төшкәндә уҡыуға бер ни етмәй, дуҫтар! Әйҙәгеҙ, гәзит-журнал, китап уҡыйыҡ!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН

### Әгәр ҙә...

Төрлө имеш-мимештәргә ҡарағанда, Яңы йылдан һуң баш ҡалабыҙҙың бер тараф хәрәкәтле урамдарындағы хәрәкәт ҡапма-ҡаршыға үҙгәрә икән. Автомобиль йөрөтөүселәр был яңылыҡҡа ҙур ҡәнәғәтһеҙлек белдергән, имеш. Йәнәһе, бер тараф хәрәкәтле урамдарға инде өйрәнеп кенә бөткәйнек, хәҙер тағы ла ике аҙымдағы эш урындарыбыҙға сәғәттәр буйына барырға тура киләсәк инде...

Уның ҡарауы, баш ҡалабыҙҙың көнһыҙыш йәшәүсе балалар был яңылыҡҡа ҡыуанған, имеш. Уларҙың хыял итеүенсә, әгәр ҙә Пушкин урамындағы бер яҡлы хәрәкәт ҡапма-ҡаршыға үҙгәрһә, 2013 йылды ҡаршылағанда Совет майҙанында шыршы ҡуйыласаҡ.

### Өс тапҡыр Яңы йыл

Мәсьәләнең төбөнә төшөп уйлап ҡараһаң, илебеҙ етәкселәренең ҡабул иткән ҡарарҙары һәр ваҡыт дәүләтебеҙ ҡаҙнаһын, илебеҙ иҡтисадын күтәреүгә йүнәлтелгәнен аңларға була. Бәләкәс кенә миҫал. Әйтәйек, сәғәт уктарын ҡышҡы ваҡытҡа күсермәй, элеккесә ҡалдырыуҙан да бер Яңы йыл төнөндә генә хәтһеҙ аҡса эшләргә була бит. Нисек тиһегеҙме? Аңлатып үтәм. Элек беҙ Яңы йылды үҙебеҙҙәге ваҡытҡа ярашлы һәм Мәскәү ваҡытына тап килтереп ике тапҡыр ҡаршы ала инек. Хәҙер ике тиҫтәгә яҡын йыл һуҙымында күсерелгән ваҡыт хөрмәтенә өс тапҡыр Яңы йылды ҡаршы аласаҡбыҙ. Дөрөҫ, бының өсөн баш ҡалабыҙ йорттарында йөҙәр меңләгән шампан шарабы асыласаҡ. Тимәк, элеккегә ҡарағанда 30 проценттан ашыуға күберәк шешәләр һатып алынасаҡ һәм илебеҙ ҡаҙнаһына шунсама өҫтәмә табыш киләсәк. Бына бит нисек тора иҡтисад хәлдәре...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...



# БАЛАЛАРҒА ӘКИӘТ ҺӨЙЛӘЙЕК!

**Ғаиләмдә лә, эшемдә лә ниндәйҙер мөғжизәле мәлдәр тыуҙырырға тырышам. Ә тормошто мөғжизәле итергә миңә башҡорт халыҡ ижады, әкиәттәр ярҙам итә. Үҙемдән бигерәк был улыма кәрәк.**

Мирас улыма әле өс йәш. Әкиәттәрҙе уға бик йыш һөйләйем, ихлас тыңлай. Күп осраҡта үҙем дә уйлап сығарам. Баланың аң кимәлен, хәтерен үҫтереүҙә был бик отошло. Ҡул аҫтында әкиәттәр китабы булмаһа, тотаһың да үҙең ябай ғына әкиәт уйлап сығараһың. Өфөлә "Тамыр" студияһында эшләгәндә, сценарий яҙып, уға ҡуйыласаҡ әкиәтте оҙаҡ уйлап йөрөй торғайным. Улым тыуғайны, башымда уның аңына ярашлы, аңлайышлы ғына әкиәттәр үҫенеүҙе тыуҙы. Аш-һыу бешергәндә, өйҙө йыйыштырғанда мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡтырырлыҡ ябай ғына әкиәттәр уйлап сығарам.

Бала әкиәтте тиҙ отоп ала. Улым минең һөйләгәнде һүҙмә-һүҙ ҡабатлай. Шуғалыр ҙа теле дөрөҫ, таҙа асыла, тип уйлайым. Бөтә хәрефтәрҙе асыҡ итеп әйтә, хатта интонацияны матур итеп бирә белә. Ошолай баланың бер юлы төрлө һәләттәре асылыуы ихтимал. Әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныуы ла арта. Әкиәт һөйләү балаға тәрбиә биреү менән бергә уны башҡаларҙы тыңларға өйрәтеү яғынан да бик яҡшы. Мәҫәлән, ашарға теләмәһә, ашҡа әүрәтеү өсөн ниндәйҙер ҡыҫҡа ғына әкиәт уйлап сығарам.

Һин һөйләгәндә бала тыңлап ҡына ултырырға түгел, ә үҙе лә ниндәйҙер эшләргә тейеш. Әйтәйек, Ҡамыр батыр әкиәтен һөйләгәндә Мирасҡа пластилин бирәм йәки ҡулына ҡағыҙ, ҡәләм тотторып ҡуям. Мине тыңлап, бер юлы әкиәттәге геройҙарҙы ла һынландыра ул. Әкиәт һөйләгәндә өйҙәге уйынсыҡтарҙы ҡулланырға була, сөнки уларҙы бала яҡын күрә, шуға әкиәтте лә ихлас ҡабул итә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн райондарҙа, бәләкәй ҡалаларҙа магазиндарҙа балалар өсөн китаптар табыуы ҡыйынға тура килә. Китапхананан алынған баҫмаларҙы балалар ҡулына ала һалып бармай, сөнки ул яңы, сағыу китаптар ярата. Учалы ҡалаһында "Китап" нәшриәтенең магазины эшләй. Унда хаҡтар ҡиммәт түгел, ләкин баҫмалар әҙ килтерелә. Халыҡ һатып алмай, күберәк алдырһам да барыбер кәштәләрҙә ятасаҡ, ти һатыусы. Уныһы ла бар. Ҡала халҡы балаларына урыҫса тәрбиә бирә шул. Учалыла ла шундай күренеш күҙәтелә. Баланы туған теленә ҡыҙыҡһындырыу өсөн телдә башта ата-әсә үҙе яратырға, матур, таҙа итеп һөйләшергә тейеш. Бала икенсе телдә һөйләшеп үҫһә, үҙ теленә, тарихына, милләтенә битараф буласаҡ. Ә бит тормоштағы бар күңелһеҙлектәрҙең башы ошо битарафлыҡта. "Йөрәгендә халҡы булмағандың, кеше булырға ла хаҡы юҡ..." тип юҡҡа ғына әйтмәгән Рәми Ғарипов. Мин ошо хәҡиҡәтте ныҡлы үҙләштергәнмен, туған телемде бик ныҡ яратам, балаларыма ла ошо һөйөүҙе бирәсәкмен, тигән маҡсат менән йәшәйем.

**Ләйсән ЮЛБИРҘИНА.**
**Учалы районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Рәсәй Федерацияһының Юғары Суды президиумы Башҡортостандағы Ҡорбан һәм Ураҙа байрамдарындағы өҫтәмә ял көндәренең законлы булыуын таныны. Шулай итеп, суд БР Дәүләт Йыйылышының ялыуын ҡарап, элек ҡабул ителгән байрам көндәрен эш көндәре тип билдәләүсе кассацион ҡарарҙы ғәмәлдән сығарҙы. РФ Юғары суды Башҡортостан Юғары суды ҡарарының үҙ көсөндә ҡалыуын билдәләне. Өфөлә йәшәүсе кешенең ғаризаһы буйынса, бығаса тиклем Рәсәйҙең Юғары Суды мосолман байрамдарын Рәсәй Конституцияһына һәм Рәсәй Хеҙмәт кодексына ҡаршы килә, был байрамдар уның хеҙмәт хоҡуғын боҙа һәм дини йәһәттән дискриминациялай, тип белдергәйне.

✔ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проектын ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә халыҡ-ара, бөтә Рәсәй, төбәк-ара, республика олимпиадалары, конкурстары, фестивалдәренең һәм спорт ярыштарының еңеүселәрен һәм призерҙарын әҙерләгән педагогик хеҙмәткәрҙәргә 2012 йылдан Башҡортостан Республикаһы Президенты премияларын булдырыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, педагогтарға премия лауреаттарҙың премияларының 100 проценты күләмендә билдәләнә һәм республика ҡаҙнаһынан финанслана. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты указына һәм Рәсәй Федерацияһының Фән һәм мәғариф министрлығы бойороҡтарына ярашлы, йыл һайын Рәсәй һәм халыҡ-ара олимпиадалар еңеүселәренә - 60-ар мең һум күләмендә, ә төбәк һәм төбәк-ара олимпиадалар еңеүселәренә, Рәсәй күләмендәге олимпиадалар призерҙарына 30-ар мең һум премия билдәләнә. Был аҡса федераль бюджеттан бүленә.

✔ Мәскәүҙә алтынсы саҡырылыш Дәүләт Думаһының беренсе пленар ултырышы үтте. Парламенттың ике комитетына Башҡортостандан һайланған депутаттар етәксе итеп тәғәйенләнде. Павел Крашенинников - Граждандыҡ, енәйәт, арбитраж һәм процессуаль ҡанунйәт буйынса комитетҡа, ә Александр Дегтярев Мәғариф буйынса комитетҡа етәкселек итәсәк. Дәүләт Думаһы рәйесе итеп Сергей Нарышкин тәғәйенләнде.

✔ Рәсәйҙәге Контроль-иҫәп органдары ассоциацияһының яҡынса һөҙөмтәләре буйынса, Башҡортостандың Контроль-иҫәп палатаһы 2011 йылда иң яҡшы унау иҫәбенә инде. Һуңғы йомғаҡтар алдағы йылдың мартында яһаласаҡ.

АФАРИН!

# БАШҠОРТ ҠЫШ БАБАЙҘАРЫ...

## йәшел елән кейеп килгән

**Баш ҡалала йыл да ойошторолоп торған Ҡыш бабайҙар парады үтте. Байрам сараһында барлығы 700 ҡышҡы тылсымсы ҡатнашты.**

Ҡыш бабайҙар быйыл Рус дәүләт драма театры эргәһендә йыйылды. Үҙ эштәре менән ҡайҙалыр ҡабаланып китеп барған кешеләр Яңы йыл ҡунаҡтарының күп булыуына һоҡланып, уларҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтте. Бер Ҡыш бабай ғына осраһа ла, кәйефең күтәрелеп китә, ә бында бер юлы 70 тиҫтәне осрат әле. Мамыҡ һаҡаллыларҙың колоннаға теҙелешеп, светофорға табан атлап, Октябрь проспектының икенсе яғына сығыуы үҙе бер тамаша булды. Юл хәрәкәте туктаны. Ә водителдәр һәм пассажирҙар байрам сәбәпселәрен кеҫә телефондарына төшөрә башланы. Ҡыш бабайҙар яңы йыл ҡотлауҙарын ҡыҫҡыра-ҡыҫҡыра, ҡала округы хакимиәте алдына йүнәлде. Унда уларҙы барабан һуғып торған Ҡарһылыуҙар ҡаршы алды.

Ҡыш бабайҙарҙың күбеһе ҡәҙимгесә кейенеп алғайны - ҡыҙыл елән, шул уҡ төҫтәге кәпәс. Бәғзеләре итек урынына бейма кейергә онотмаған. Ғөмүмән, парадта уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр ҡатнашыуы традицияға ингән. Шуға күрә ҡатын-ҡыҙҙарҙың да Ҡыш бабай булып кейенеүенә аптырайһы түгел.

Башҡорт Ҡыш бабайҙары ла булды байрамда. Йәшел кәпәстәренән, йәшел еләндәренән танып була ине үҙҙәрен. Киров районының бер мәктәбенең физкультура уҡытыусыһы, мөһабәт кәүҙәле, ҡалын көр тауышлы Илһам Килмөхәмәтов балаларҙы Ҡыш бабай барлығына ышандыра ала. Мамыҡ һаҡалы йөҙөн ҡаплаһа ла, күҙҙәренән, яғымлы ғына итеп һүҙ ҡушыуынан, өндәшеүенән изге булыуы күренеп тора. Балалар уның бүләктәрен ихлас ҡабул итеп ала. "Ҡыш бабайҙар парадында мәктәп исеменән йыл да ҡатнашам. Мәктәбемдә лә алыштырғыһыҙ Ҡыш бабаймын. Әммә заказдар буйынса өйҙәргә килеп бүләк таратҡаным юҡ", – ти ул.

Конкурста яңы йыл экипаждарының ҡатнашыуы быйылғы парадтың яңылығы булды. Һәр райондың сағыу итеп биҙәлгән экипажы колонна буйлап елдереп үтте. Байрам ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. Ҡатнашыусылар төп Ҡыш бабайға ант бирҙе, шиғырҙар уҡыны, бүләктәр таратты. Аҙаҡ киренән Рус дәүләт драма театры янындағы ширшыға йүнәлделәр. Унда уларҙы балалар көтә ине инде. Ҡыш бабайҙар бейеү конкурсында ҡатнашты, балаларҙың күңелен асыу оҫталығын күрһәтте. Һәр кем теләктәр теләне. Теләгендең тормошҡа ашыу мөмкинлеге 700 тапҡырға артҡайны бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Байрам күңелле үтте, күргәндәр оҡшатты. Тик күбеһе был сараға килә алмай ҡалды. Парад эш көнөндә, балалар мәктәптә булғанда уҙғарылды бит. Күптәр байрамдың проспект буйында түгел, ә берәй майҙанда үтеүен теләгәйне. Ул ваҡытта тамашасылар ҙа күберәк булыр ине.**

**Мөнир ИҪСАНОВ.**



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БОҘ ИЛЕНӘ СӘЙӘХӘТТӘР



**"Тағы берҙе генә әйәм!" – тип, һырғалаҡ тауына үрмәләп менеп китәһең дә, үҙең менән алып килгән шыуғысҡа нисек етте шулай ашығып ултырып алып, аҫҡа табан елдерәһең... Таныш күренешме? Әйе, был ҡабатланмаҫ һәм онотолмаҫ хәтирәләр - беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙың баласаҡ иле хәтирәһелер. Беҙ, Уралда йәшәүсе халыҡ, йәйҙе лә, ҡышты ла күрә алыуыбыҙ менән бәхетлелер, моғайын. Бары тик ҡырыҫ тәбиғәтле Уралда ғына балалар үҙҙәрен ҡар тауҙары батшалары итеп тә, йәйҙәрен эҫе ҡом иле хандары итеп тойоп уйнай ала. Әйткәндәй, яңы йыл алдынан балаларығыҙ менән берҙе булһа ла быйылғы боҙ илдәрен күреп әйләндегеҙме әле? Ашығығыҙ, тиҙҙән боҙ һындарҙы терелтер, хыялдарҙы тормошҡа ашырыр мәл етәсәк бит!**

Аждаһа йылын ҡаршылап, баш ҡала районларында бөтәһе 25 боҙ ҡаласыҡ барлыҡҡа килде. Күптән түгел Ленин майҙанында Благовещендан килтерелгән бейеклеге 31 метрлыҡ мөһәбәт шыршы биҙәлде. Быйылғы үҙәк шыршы – ошо. Уның эргәһендә бейек-бейек һырғалаҡтар, боҙ һындар панорамаһы ҡалҡып сыҡҡан. Үҙәк майҙан шыршыһының матурлығы башҡа йылдарҙағынан бер ҙә ҡайтыш түгел.

Ә быйыл Совет майҙанында шыршы булмаясаҡ. Ленин урамындағы бер яҡлы транспорт хәрәкәте сәбәпсе быға, тинеләр. Шыршыны Совет майҙанынан алыҫ түгел В. Маяковский скверына күсерҙеләр. Бындағы шыршы тирәләй барлыҡҡа килгән майшәмдәй серле һындар балаларҙы ғына түгел, ололарҙы ла йәшлек илдәренә илтә. Боҙ һындар араһында ракетаға, Маяковский һәйкәленә ҡарап торған сабый бала һынына, туңдырма һатыусы әбей менән тәмлекәсте бушлай әләктерергә теләгән малайға һәм башҡа ҡыҙыҡ та, барыбыҙҙың күңеленә яҡын да күренештәрҙе ҡарап, доньяңды оноторға була. Ошо һындар авторҙарының береһе, рәссам, Өфө сәнғәт академияһы студенты, Сибай егете Айнур Юнысбаев фекеренсә, боҙ һарайҙары кешеләргә күңел йылылығы өләшә. Мәҫәлән, үҙе "Туңдырма һатыусы әбей"ен бер аҙна буйы семәрләгән, йышҡан, һылаған, һыйпаған. Бөгөн бына бихисап Яңы йыл байрамдары тигән дөйөм ҡыуанысҡа үҙ өлөшөн индереүе менән бәхетле йылмайып баҫып тора. Әйтергә кәрәк, рәссам һөнәренә уның өмөтө ҙур. Сөнки, Айнурҙың фекеренсә, тырыш булһаң, был донъяла ғөрләтеп йәшәргә була. Сатлама һыуыҡтарҙа ҡулды туңдырырлыҡ, әммә, күңелде иретерлек боҙ һындар эшләүсе оҫта менән һаубуллашып, бүтән майҙандарға ашығабыҙ...

Орджоникидзе районында иһә Нуриман районында буй еткергән йәшел ҡунаҡ - 24 метрлыҡ шыршы тирәләй А.С.Пушкин әкиәттәре кәүҙәләндерелгән. Был районда барлығы 4 боҙ иле: "С.Орджоникидзе исемендәге" майҙан, Т. Черкассы, Иҫке Турбаслы һәм Тимашево ҡасабаларындағы майҙансыҡтар үҙҙәренә килгән һәр ҡунаҡҡа яңы йыл ҡыуанысы өләшәсәк. Октябрь районында 5 ҡаласыҡ: В.И Ленин исемендәге, Спорт һарайы алдындағы һәм "Башҡортостан" сауҙа үҙәге янындағы майҙандарҙа, "Ҡашҡаҙан" ял һәм мәҙәниәт паркында һәм Нуғай ҡасабаһында урынлашһа, Дим районында мәҙәниәт һәм ял паркында бары тик бер генә ҡаласыҡ эшләнгән. Калинин районында 3 урында - Мотор эшләүселәр берекмәһе мәҙәниәт һарайы майҙанында, Инорс һәм Шаҡша биҫтәләрендә боҙ ҡаласыҡтары ҡалҡып сыҡҡан. Киров районында ҡала халҡын һәм баш ҡала ҡунаҡтарын 6 майҙан үҙенә саҡыра: В. Маяковский исемендәге сквер янында, "Конгресс-холл", "Ирәмәл" сауҙа һәм күңел асыу үҙәге, "Ҡунаҡһарай" алдарындағы майҙандар, Дуҫлыҡ монументы янындағы Агиҙел йылғаһы яры, Искино ауылы. Ленин районында 4 урын: Затон биҫтәһендәге "Тулҡын" скверы, Нижегородка биҫтәһенең "Нижегородсы" стадионы, "Нагорный" биҫтәһенең Киров урамы, 1, Кооператив биҫтәһенең Ватанды һаҡлаусылар урамы, 6-сы йорттар алдындағы майҙансыҡтар, Совет районында "УЗЭМИК" мәҙәниәт һәм сауҙа үҙәге һәр кемде боҙ иленә сәйәхәткә саҡыра.

**Илгизәр БУЛАТОВ әҙерләне.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Ирек Ялалов социаль объекттарҙы, атап әйткәндә, балалар баҡсаларын асыуға айырым иғтибар бүленеүен билдәләп үтте. Уҙған йылда 5 яңы балалар баҡсаһы асылған. 2012 йылда ҡаланың төрлө райондарында тағы 5 баҡса төҙөү ҡаралған.

✔Республиканың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы яңы эш башлаған йәш эшҡыуарҙар өсөн курстар ойоштора. Бында студенттар, йәш эшҡыуарҙар һәм 30 йәшкә тиклемге эшләмәгән йәштәр бизнес нигеҙҙәренең серҙәренә төшөнәсәк. 72 сәғәт эсендә уҡыусылар бизнес-планлаштырыу, бизнес менән шөғөлләнеүҙең юридик аспекттарын һәм продукцияны тәҡдим итеү ысулдарын өйрәнәсәк. Уҡыу тамамланғас, уларға дәүләт өлгөһөндәге танытмалар тапшырыласаҡ. Курстарға Өфө халҡы ғына түгел, Ишембай, Салауат ҡалаларында йәшәүселәр ҙә йөрөй ала.

✔Йылайыр районында Яңы йыл байрамы алдынан яңы мәктәп асылды. Н.Р.Иреков исемендәге дөйөм урта белем биреү мәктәбе 340 урынға иҫәпләнгән, ул заман талаптарына тулыһынса яуап бирә. Мәктәпте асыу тантанаһында Башҡортостандың мәғариф министры Әлфис Ғаязов ҡатнашты. Шул уҡ көндө Әлфис Ғаязов Йылайыр районының махсус (коррекцион) мәктәп-интернатында булды һәм уның директорына "Мәктәп автобусы" программаһы сиктәрендә был уҡыу йортона бүленгән яңы автобус асҡысын тапшырҙы.

✔Өфөгә йәлеп ителгән инвестициялар күләме 2011 йылда 41,4 миллиард һум тәшкил иткән. Был 2010 йылға ҡарағанда 13,3 процентҡа күберәк. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Ирек Ялалов уҙған йылғы эштәргә йомғаҡ яһап, ошо турала хәбәр итте. Әлеге көндә Өфө иҡтисадына 90 миллиард һумлыҡ инвестиция йәлеп итеү өсөн төрлө проекттар тормошҡа ашырыла. Һөҙөмтәлә 17 меңдән ашыу эш урыны асыу күҙаллана. Росбизнесконсалтинг рейтингына ҡарағанда, Өфө эшҡыуарлыҡты алып барыу шарттары буйынса Рәсәй ҡалалары араһында Краснодар һәм Екатеринбургтан ҡала өсөнсө урында килә.

✔2011 йылда "Таҙа һыу" программаһы нигеҙендә 1200 диаметрлыҡ магистраль һыу үткәргес файҙаланыуға тапшырылды. Уның дөйөм оҙонлоғо 12 километр тәшкил итә. Был объект бер нисә мөним бурысты тормошҡа ашырырға ярҙам итәсәк.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**Ошо көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ултырышы үтте. Йыл аҙағында үткәрелгән саралар, билдәле, эшләнгән эштәргә йомғаҡ яһауға арнала. Башҡарма комитет ағзалары, Рәсәй төбәктәрендәге һәм Башҡортостандың район-ҡалаларындағы ҡоролтай рәйестәре, шулай уҡ илдең алтынсы саҡырылыш Дәүләт Думаһына һайланған депутаттар ҙа ҡатнашҡан ултырышта йыл йомғаҡтарынан тыш, илдәге, республикалағы социаль-иҡтисади, рухи-мәҙәни мәсьәләләр ҙә тикшерелде.**

**Башҡорт халҡының матди һәм рухи мәҙәниәтен үҫтереү өлкәһендәге оло хеҙмәттәре өсөн бер нисә милләттәшебеҙгә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының йәмәғәт премияларын тапшырыу - сараның иң тулҡынландырғыс мәле булғандыр. Премияға 18 шәхес: рәссам-скульптор Өлфәт Ҡобағошов, "Ғәлиә" химчисткаһы директоры Рәйлә Фәсхетдинова, шағир, филология фәндәре докторы Рәшит Шәкүр, тарихсы, ғалим Әнүәр Әсфәндиәров, "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы етәксеһе Илдар Шәйәхмәтов, Силәбе өлкәһе "Уралым" гәзитенең баш мөхәррире, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Урал Сафиуллин, донъяның виртуоз ҡумыҙсыһы Миңлегәфүр Зәйнетдинов, "Аҡ тирмә" башҡорт мәҙәни үҙәге етәксеһе Ләлә Бейешова, яҙыусы, "Тормош һабаҡтары" дәреслеге авторы Мәрйәм Бураҡаева, Күмертау ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Рәйсә Сырлыбаева, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы журналисы Салауат Хәмиҙуллин, яҙыусы, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, медицина фәндәре докторҙары, профессорҙар Марс Юлдашев менән Мәхмүзә Ғәйнуллина, Ишембайҙан йәмәғәт эшмәкәре Абдрахман Вәлидов, Әбйәлил районы сәсәниәһе Вәсилә Садиҡова лайыҡ булды. Беҙгә уларҙың ҡайһы берҙәре менән әңгәмәләшеп алырға форсат тейҙе.**

# ХАЛЫҠ БАҺАҺЫ -

## баһаларҙың иң ҡәҙерлеһе...

**Рәшит ШӘКҮР, шағир, филология фәндәре докторы, БДПУ профессоры:** Бөгөн фиҙакәрҙәрҙе билдәләнеләр. Әммә фиҙакәрлек нимәһе менән үҙенсәлекле? Фиҙакәр кешенең тормошо башҡаларҙыҡынан шуныһы менән айырыла: ундайҙарға тормош һынауҙарҙы ла күберәк бирә. Бына шундай күп һынауҙар аша үткән, әммә ҡуйған маҡсатына, халҡына биргән вәғәҙәһенә тоғро кешеләр бүләкләнде бөгөн.

**Вәсилә САДИҠОВА, халҡы ялдағы мәҙәниәт хеҙмәткәре, сәсәниә, Әбйәлил районы Һәйетҡол ауылы:** Был премияны биргәстәр, ғүмерем, ихласлығым бушҡа булмаған икән, тигән һығымтаға килдем. Мин һәр саҡ халҡыбыҙ өсөн тырыштым: халҡым шатланғанда - шатландым, ул ҡайғырған ваҡытта - ҡайғырҙым. Халҡы ялға киткәнсе 20 йыл клуб мөдире булып эшләнем, ауыл халҡын ойоштороп, һәр ваҡыт төрлө сараларҙа ихлас ҡатнаштырыуҙан йәм табып эшләнем. Шуныһы айырыуса ҡәҙерле миңә: республикала иң беренсе булып беҙҙең ауыл кешеләре - һәйетҡолдар айыҡлыҡ тураһында белдереп, оран һалды. Был премияны алыуҙа үҙемдең генә өлөшөм барҙыр, тип уйламайым - беҙҙең менән бергә булған халҡыбыҙға биреләге был премия. Халыҡ хеҙмәтсеһе булыуымды күреп, лайыҡлы, тип баһалаған кешеләргә ҙур рәхмәтлемен.

**Рәйсә СЫРЛЫБАЕВА, Күмертау ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:** Күмертауҙағы башҡорт балалар баҡсаларын, башҡорт мәктәптәрен, хатта беҙ ойоштороған "Кинйә Арыҫланов" исемендәге фольклор ансамблен дә йыл һайын ябырға уҡталалар. Нисә йыл буйына инде улар өсөн көрәш алып барабыҙ, бергәләшеп, ойошоп эшләйбеҙ. Иң тәүҙә телебеҙҙе һаҡлау бурысын атҡарыу өсөн тырышабыҙ. Мин инде 15 йыл ҡоролтайҙы йөрәк ҡушыуы буйынса етәкләп, милләттәштәрҙе алға әйҙәп алып барам. Был эштәрҙе эшләргә Хоҙай үҙе ҡушҡандыр, тип ҡабул итәм.

**Абдрахман ВӘЛИДОВ, Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ ауылы:** Күп эштәрҙе тамамларға кәрәк әле: Шихан тауҙары теҙмәләре зонаһын тәбиғәт ҡурсаулығы итеү мәсьәләһе әлегә хәл ителмәгән. Бик ҙур алға китештәр бар шулай ҙа: күптән түгел Рәсәй Федерацияһының Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығынан хат килде. Унда: "Әгәр һеҙҙең йәмәғәтселек Шихан тауҙарын һаҡлап ҡалырға теләй икән, ҡурсаулыҡ зонаһы эшләү - берҙән-бер юл", - тип, ишара яһағандар. Шулай ҙа үҙҙәре тарафынан инициатива күренмәй әле. Шуға күрә тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау эшендә бары тик үҙ көсөбеҙгә генә ышанырға тура килә. Йөрәктауҙан алып Торатауға тиклемге биләмәне киләсәктә ЮНЕСКО реестрына индереүҙе маҡсат итеп ҡуябыҙ.

**Өлфәт ҠОБАҒОШОВ, рәссам, скульптор, Өфө ҡалаһы:** Эште бер ваҡытта ла нимәлер өмөт итеп эшләмәйем. Һуңғы ун йыл эсендә 50-гә яҡын ҙур проектты тормошҡа ашырырға яҙҙы. Әле бүләкләнгән башҡа кешеләр ҙә премия алыуға өмөтләнгәндән генә башҡармағандыр эштәрен - ысын хис менән, йөрәген биреп, баштарын баҫып эшләгәндәр бүләкләнде, тип уйлайым. Сөнки бөгөнгө ҡатмарлы осорҙа, Рәшит уҙаман Шәкүр әйткәндәй, ысын мәғәнәһендә фиҙакәр булһаң ғына ҙур эштәр атҡарып сығырға мөмкин.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡурайсы, фольклорсы Юлай Ғәйнетдинов: "Башҡорт халҡы һайлап ҡуйған кешеләр, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары был премияны миңә бирергә ҡарар иткән икән, уны мин башҡорт халҡының баһаһы, тип ҡабул итәм", — тигәйне. Уның фекерен башҡалар ҙа хупланы. Премиялар нимәһе менән айырыла? Әлбиттә, был турала һүҙ йөрөткәндә бүләкләүсенең дә, бүләкләнеүсенең дә күңеленә иғтибар итергә кәрәктер. Ни өсөн тигәндә, бүләктең дә төрлөһө була — затлыһы ла, ябайырағы ла, шулай уҡ исем өсөн бирелгәне һәм ысын күңелдән тапшырылғаны ла. Халыҡ күңеле бер ваҡытта ла яңылма булмай: уның өсөн аҡ — һәр ваҡыт аҡ, ә ҡара — һәр ваҡыт ҡара. Шуныһы менән дә халыҡ ышаныһын яулауы еңелдән түгел: бер көн, бер йыл эсендә генә яуланмай ул. Шулай булғас, бүләкләнеүсе зыялыларыбыҙҙың ни кисереүен аңлауы ауыр түгел: халҡың өсөн йәшәп, уның баһаһын алыу ҙур бәхеттер, моғайын.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**



# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Тын юлдары ауыртҡанда

2 ҡалаҡ аҡ май, 2 йомортҡа һарыһы, 1 балғалаҡ бойҙай оно, 2 балғалаҡ балды бергә болғап, көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

### Шәкәр сире

Шәкәр сиренән тәбиғәт үҙе дауалай. Он итеп төйөлгән 1,5 ҡалаҡ етен орлоғо өҫтөнә 400 мл ҡайнар һыу ҡойоп, һүрән утта 5 минут ҡайнатырға һәм һыуытырға. Көнөнә 4 тапҡыр 1/3 стакан эсергә (эсер алдынан болғатырға).

### Ашҡаҙан йәрәхәтенән дауа

❖ Таҙартылған картуфты тоҙһоҙ ғына бешерергә һәм шул һыуҙы эсергә (картуфын айырып алырға);

❖ ярты стакан киптерелгән йәки яңы өҙөлгән юл япрағы үләненә 1 литр ҡайнаған һыу ҡойоп төнәтергә. Һыу эске килгән һайын шуны эсергә;

❖ көнөнә ике тапҡыр, ашарҙан 20 минут алда, 4 - 4,5 см оҙонлоғондағы алоэ япрағын ашарға. Сәйнәргә, һутын йотарға, ә йомшаҡ өлөшөн йотмаһаң да ярай. 3 ай дауаланғандан һуң, бер аҙ ял итергә һәм дауаны тағы ла ҡабатларға.

### Арыуҙан дауа

Һалҡын айҙарҙа кеше үҙен бик арыған итеп тоя. Организмға хәл индереү өсөн 100 грамм бесәй борсағы (астрагал) үләнен 1 литр ҡыҙыл шарапта даими болғатып, 3 аҙна төнәтегеҙ һәм көнөнә 3 мәртәбә, ашарҙан ярты сәғәт алда 30-ар грамм эсегеҙ.

### Хәтерҙе нығытыу

Бының өсөн мейене "һыйлау" мотлаҡ. В2 витаминына бай ризыҡтарҙы ашау бигерәк файҙалы, мәҫәлән, майһыҙ һөт, йогурт, борсаҡ культуралары, ит, картуф, диңгеҙ продукттары. Спорт менән саф һауала йөрөүҙе лә иҫтән сығарырға ярамай. Былар бөтәһе лә баш мейеһен "туйындыра", тимәк, хәтер ҙә нығый.

### Ҡара көртмәле

Был емештә марганец һәм органик кислота күп. Уны гастриттан, быуындар һыҙлауынан, тире ауырыуҙарынан, бөйөргә таш ултырғанда ашарға, япрағын сәй итеп эсергә була. Өҫтәүенә, ҡара көртмәле күреү һәләтен дә яҡшырта, ҡандағы шәкәрҙе кәмetә, йоғошло сир микробтарын үлтерә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Дуç тип әйтеү - ҡайғы һәм шатлыҡтарҙы уртаҡлашыусы, кәрәк һәм ауырлыҡ ваҡыттарында кәңәшсе, һәр ваҡытта өҫкә алған бурыс һәм йөкләмәләрҙе хөрмәтләүсе тип әйтеүҙәр.*






# ӨЙ҆ ҺАЙЛАМА...
## күрше һайла

**Күршеләр хаҡы - шәриғәт ҡаршыһында беренсе дәрәжәлә ҡушылған хаҡтарҙан икәнлеге һәр кемгә мәғлүмдер. Шуның өсөн күршегә хөрмәт күрһәтеү, ауырыған ваҡытында хәлен һорау, хәсрәттәрен уртаҡлашыу, кәрәк булғанда ярҙам итеү, ярамаған нәмәләргә күҙ йомоу, малына һәм әйберҙәренә ҡул һуҙыуҙан һаҡланыу - ғаилә өсөн оло бурыс.**

Күрше хаҡы - фәҡәт зарар килтермәү генә түгел, ә ул килтергән зарарҙарға түҙеп һәм һаман гүзәл мөғәмәләлә булыу менән үтәлер. Шуның өсөн, өй һалыуҙан йәки һатып алыуҙан алда күршеләреңде белеү һәм хәлдәрен аңлау тейеш була.

Күршеләрҙең хаҡтары оло булып, уларҙы үтәү мәсьәләһендә яҡлаусы Бәйғәмбәребеҙ тарафынан барлыҡҡа килтерелгән әмер һәм нәсихәттәр хәҙис китаптарында күп яҙылған. Ғаиләле булған кешеләр өсөн ҡайһы берҙәрен генә булһа ла ишетеп ғәмәл ҡылыу тейеш.

Кеше хәлен һынаясаҡ нәмә - уның дуҫтарылыр. Бер кешенең хәлен белергә теләгән кеше - иң элек уның дуҫтарын өйрәнер һәм уларға ҡарап, был кешенең дә хәлен, холҡон белә алыр.

Шул сәбәпле, дуҫ һайлағанда, диндар, төплө, дөрөҫ фекерле, әҙәпле, гүзәл холоҡло заттарҙы эҙләү һәм, әгәр ҙә табылһалар, әхирәттә бергә булыу һүҙе менән үлемдән башҡа нәмәләрҙән айырылмаҫҡа тейешлелер.

Дуç тип әйтеү - ҡайғы һәм шатлыҡтарҙы уртаҡлашыусы, кәрәк һәм ауырлыҡ ваҡыттарында кәңәшсе, һәр ваҡытта өҫкә алған бурыс һәм йөкләмәләрҙе хөрмәтләүсе тип әйтеүҙәр. Шулай булмаған кешеләрҙең дуҫлыҡ күрһәтеүенә алданыу һәм биргән йөкләмәләренә ышаныу дөрөҫ булмаҫ. Дуҫтарҙы - рәхәт көндәрҙә түгел, бәлки, мәшәҡәтле сәғәттәрҙә һынайҙар.

Ҡәрҙәш, дуҫ һәм белештәргә хәл белергә барыу ваҡыты һәр ерҙең һәм һәр замандың үҙенә генә махсус булған ғәҙәттәренә эйәрер. Хәл белергә барыу ваҡыттарында самаһыҙ булмау шарты менән хәлдәрен һорау һәм сәләмәтлектәрен белеү - әҙәплелек булыр. Ләкин керле кейемдә һәм таҙа булмаған ҡиәфәттә хәл белергә барыу ғәйеп булған кеүек, хәл белергә барыусыларҙы ла бындай ҡиәфәттә ҡаршыларға ярамай.

Мәжлестәрҙә әҙәбиәт һәм әхлаҡ, ғәҙәти ихтыяж хаҡында бәхәстәр ҡоролһа, халыҡ өсөн күберәк файҙаһы булыр. Уйламағанда бер-берейһенең кейеменә ҡарап ултырыу, йәки фәләндең ҡатынын ғәйепләп һөйләүҙән ғибәрәт булһа, бындай мәжлестәр һис кем өсөн файҙалы булмаҫ.

Мәжлестәрҙә турғай шаулауы кеүек, һәр кем һөйләп ҡалырға тырышҡанын күрһәгеҙ, белегеҙ, бында йыйылған кешеләр - ҡара халыҡтыр. Йәмғиәттең юғары ҡатламы мәжлесе бындай булмаҫ, бәлки, улар йыйылған ерҙәрҙә береһенең һөйләгәнен ҡалғандары тыңлар. Тыңлаусылар өсөн берәйһе гүзәл нәмәләр тураһында һөйләр.

Аллаһы Тәғәлә барыбыҙға ла үҙе риза буласаҡ инаныу менән хөрмәтләнергә һәм изге ғәмәлдәр ҡылырға, гүзәл вәғәздәрҙе тыңлап, еренә еткерергә ярҙам бирһен! Бәхет эйәһе булған кеше башҡа заттарҙан ғибрәт алыр һәм үҙенең ғәйептәрен тикшерер, сәләмәтлек тә ошондалыр.

ӘЙҘӘГЕҘ...

**...Фани донъянан арыныу йолаһын (саньяса) үтәү өсөн Һиндостанда йәшәүсе изге йәнгә бар донъянан кешеләр йыйылған, ти. Шунда изге кеше: "Мин һеҙгә саньяса бирәсәкмен, тик артабан һеҙ айырым бер төр кейем генә кейергә тейеш буласаҡһығыҙ", - тигән. "Ни өсөн? Беҙҙең эске булмышыбыҙ үҙгәрһә, тышҡы ҡиәфәтебеҙ ниндәй булһа ла ярамаймы ни?" - тип һораған халыҡ. "Эске һәм тышҡы донъяның бер ниндәй ҙә айырмаһы юҡ. Тыштағы - эстә, эстәге - тышта", - тип яуаплаған изге кеше.**

# ЗАУЫҠЛЫ ИТЕП...
## башҡортса кейенәйек!



Аҡыллыға - ишара, ти халыҡ. Бөгөн беҙҙең тышҡы ҡиәфәтебеҙ генә түгел, эске донъябыҙ ҙа үҙгәрә, күңелебеҙҙе ситтәргә хас ҡиммәттәр баҫа бара. Бына шуның өсөн дә "Әйҙәгеҙ, башҡортса кейенәйек!" тип өндәшәбеҙ һиңә, ҡәҙерле уҡыусым. Һүҙ, әлбиттә, тулыһынса милли кейемгә күсеү тураһында бармай. Бик күптәр милли элементтар булған көндәлек кейемдәрҙе кейергә теләк белдерһә лә, әлегә баш ҡалала бындай хеҙмәт күрһәтеүсе тегеү ательелары юҡ кимәлендә. Шулай ҙа арабыҙҙа кейеменә сағыу ғына берәй милли элемент өҫтәп ебәреп, ябай ғына күлдәген бынамын тигән сәнғәт өлгөһөнә әүерелдереүсе апайҙарыбыҙ ҙа бар. Уларҙың береһе - Өфө ҡалаһында йәшәүсе Альбина апай Исхаҡова.

- Милли кейемде ни тиклем генә яратһам да, йәшерәк, балалар үҫтергән саҡта уның ниндәйҙер өлөштәрен көндәлек кейемдәр менән бергә кейергә мөмкин икәнлеген уйлап еткермәгәнмен. Баҡтиһәң, кеше араһына милли кейем кейеп сығыу өсөн дә рухи яҡтан өлгөрөп етергә кәрәк икән.

Ейәндәрем тыуған осорҙа тотош илдә милли рух күтәрелә башлағайны. Мин дә уландарымды "Тамыр" студияһына йөрөтә башлағас, уларға яйлап ҡына милли кейемдәр кейҙерә башланым. Шул сабыйҙар менән бергә минең дә рухым нығынды, милли кейемгә ҡарата яратыуым артты, тип әйтә алам. Әммә башта үҙем халыҡ алдына милли кейемдә сығырға йөрьәт итә алманым. Хафиза тигән апайым милли кейемдәрҙә йөрөргә ярата торғайны, уға эйәреп кенә концерттарҙа күренгеләй башланым. Хәҙер инде кәзәкейемде сискем дә килмәй. Ҡараҡ төҫтәге оҙон итәк кейеп, өҫтөнән кәзәкей кейәм дә, берәй биҙәүес тағам, бына һиңә - башҡорт элементтары менән байытылған костюм килә лә сыға. Сулпылар тағырға, түшелдерек (уны ҡайһы бер төбәктәрҙә селтәр тип йөрөтәләр) кейергә яратам, һирәгерәк башыма ҡашмау ҙа кейеп алам. Уларҙы бынан егерме йылдар элек үҙемдең тыуған районым Әбйәлилдә һатып алғайным. Хәҙер үҙем дә яйлап ошо биҙәүестәрҙе өйрәнеп, яһарға ниәтләнеп торам, - ти Альбина Хажим ҡыҙы.

Ҡиәфәткә милли колорит өҫтәү өсөн күп тә кәрәкмәй. Мәҫәлән, көмөш беләҙек тағыу ҙа етә. Көмөш беләҙек таҡҡан башҡорт ҡыҙы әхлаҡһыҙ ҡыланмаясаҡ, сөнки ул үҙенә генә түгел, бөтөн башҡорт халҡына тап төшөрәсәген яҡшы аңлай. Тимәк, биҙәүес тә оло тәрбиәүи әһәмиәткә эйә була ала. Етмәһә, хәҙер теләгән кешегә бындай биҙәүестәрҙе ҡайҙан һатып алырға, тип аптырап ултырырға түгел. Һәр ювелир кибетендә ярым ҡиммәтле таштар менән биҙәлгән алҡалар, йөҙөктәр һатыла. Учалы һөнәрселәре бигерәк зауыҡлы сулпылар, беләҙектәр яһай, һатып ал да, рәхәтләнеп тағып йөрө! Әйҙә, бар донъя үҙеңә лә, милләтеңә лә хөрмәт менән баҡһын. Бер-беребеҙгә көмөш беләҙек бүләк итеүҙе лә ғәҙәткә индерәйек, етмәһә, был металдың организм өсөн файҙаһы ла күптән асыҡланған.

Борон-борондан әллә ниндәй ҡиммәтле тиреле йәнлектәр төйәк иткән Уралда йәшәгән халҡыбыҙҙың һунарсылыҡ итеп, ҡама тундар ғына кейеп йөрөүен, үҙебеҙҙең ниндәй затлы һәм зауыҡлы заттан икәнебеҙҙе иҫкә төшөрәйек тә, кейемебеҙгә ниндәй ҙә булһа милли элемент өҫтәп ебәрәйек, гүзәл заттар! Нимә генә тимә, эске һәм тышҡы донъяның бер ниндәй ҙә айырмаһы юҡ, тыштағы - эстә, эстәге - тышта.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҺҮГЕНМӘЙЕК!
## Ул ҡарғышҡа тиң гонаһ



**Донъяны һүгенеү, насар һүҙҙәр баҫып алғандай тойола ҡайһы саҡта, сөнки уларҙы төрлө урында һәм төрлө кешенән ишетергә мөмкин. Оло-лар, йәштәр, гүзәл заттар, хатта телдәре саҡ асылып килгән балалар ауыҙынан да ошондай "матур һәм яғымлы" һүҙҙәр осоп сығыуына күнегеп тә кителгән хатта. Бындай һүҙ ҡулланыусы оло кеше үҙенең ғүмер юлында ниндәй "аҡылға" өйрәнгәнен иҫбатлаһа, йәштәр үҙҙәрен замандан артта ҡалмаусы, "модалы" итеп күрһәтергә тырышһа, балаларға, ҡыҙыҡ күреп, ололар өйрәтә. Ләкин был, ысынлап та, ҡыҙыҡмы? Ҡыҙғаныс, тип әйтеү дөрөҫөрәктер, сөнки баланың был ҡыланышы аша уны уратып алған ололарҙың аң кимәле түбән, һүҙ запасының ярлы һәм уйлаған уйҙарының ошо юҫыҡтан ары китмәүен тойомларға була. Элегерәк һүгенеү һүҙҙәре нығ асыуланғанда ғына әйтелә, тигән уй-фекер бөгөнгө көнгә һис тә тура килмәй, сөнки был һүҙҙәр бөгөнгө көндә ҡайһы берәүҙәр тарафынан һөйләмде бер-береһенә ҡушыу өсөн дә ҡулланыла. Һүгенеүһеҙ йәшәп буламы? Бындай һүҙҙәр ҡулланыу ниндәй эҙемтәләргә килтерергә мөмкин? Уны еңеү өсөн нимә эшләргә кәрәк? Һүҙҙе гәзит уҡыусыларға бирәйек.**

**Айнур СӘЙФУЛЛИН, Дәүләкән ҡалаһы:** Кешегә Хоҙай тарафынан бөйөк "ҡорал" - һүҙ бирелгән. Беҙ нәҡ һүҙ ярҙамында аҡыл һәм ғилемгә эйә булабыҙ, тирә-яҡтағылар менән мөнәсәбәт ҡорабыҙ. Тик матур, яғымлы һүҙҙәр менән бер рәттән, насар һүгенеү һүҙҙәренең дә йыш ҡулланылыуы хәүефкә һала, сөнки иҫбат ителеүенсә, бындай һүҙҙәр кешегә ДНК кимәлендә тәьҫир итеп, энергетиканы бысратыусы булып тора. Бындай һүҙҙәр ярҙамында беҙ тирә-яҡҡа бысраҡ, яуыз һәм уҫал энергия сәсәбеҙ, ә ул беҙгә төрлө бәлә, ауыр мәсьәлә һәм проблема рәүешендә кире әйләнеп ҡайта. Шуға күрә һәр һүҙебеҙҙе уйлап, үлсәп, һүгенеү һүҙҙәрен ҡыҫтырмайынса һөйләшәйек.

**Зөлфәр ИСҠУЖИН, Өфө ҡалаһы:** Башҡорт теле - матур, яғымлы, тос, бай тел һәм уны ниндәйҙер һүгенеү һүҙе менән бысратыу, минеңсә, милләтеңдең йөҙөнә төкөрөү менән бер. Үҙен, халҡын ихтирам иткән кеше бер ҡасан да бындай түбәнселеккә төшмәйәсәк һәм бындай һүҙҙәр һөйләмәйәсәк. Өйҙә ниндәй мөхит хөкөм һөргәнен балалар теленән яҡшы аңлап була. Әгәр ҙә ололар әшәке һүҙ һөйләп, негатив мөхит тыуҙыра икән, бала ла тап ошоно уҡ ҡабатлаясаҡ һәм шулай уҡ ҡыланасаҡ. Бар тәрбиәне бер насар һүҙ менән юйып ташларға мөмкин икәнлеген онотмай, балаларыбыҙҙы позитив, шатлыҡ һәм нур бөркөлөп торған мөхиттә тәрбиәләйек.

**Ринат УСМАНОВ, Әбйәлил районы, Аҫҡар ауылы:** Төрлө социологик һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, Рәсәйҙә халыҡтың 70 проценты һүгенеү һүҙҙәрен ҡуллана, ләкин уларҙың күбеһе был һүҙҙәрҙе "үҙенән-үҙе телдән сыҡҡан" һүҙбәйләнеш булараҡ ҡына аңлата. Тик күптәр ул һүҙҙәрҙең тамыры тәрәндә һәм кемгәлер ҡарата әйтелгән һүгенеү һүҙе уны ҡарғау, ҡайһылыр осраҡта сихырлау, арбауға ҡайтып ҡалыуын аңламай. Элекке заманда ҡатын-ҡыҙға, ауырлы ҡатынға йәки балаға ҡарата һүгенеү һүҙе ҡулланыу оло гонаһ һаналған. Бындай һүҙҙе өйҙә йәки мал аҙбарында әйтеү ҙә ҡырҡа тыйылған, сөнки был ҙур ҡаза килтереүе мөмкин, тип һаналған. Ә бөгөн нисек? Өйҙә, тышта, кеше араһында, ҡатын-ҡыҙға, балаға - берәү ҙә ҡарап тормай, телен тыймай. Был күренеш, ҡыҙғанысҡа күрә, тәбиғигә әүерелеп бара. Быға юл ҡуймайыҡ, матур һәм сағыу төҫтәргә мансылған донъяны ҡараңғылыҡ мөһөрө менән ҡаплауҙан һаҡлайыҡ.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТКӘ ХЕҘМӘТ ИТӘЙЕК!

**Тарих - үҙенсәлекле фән. Ҡайһы яғы менәндер ул барлыҡ фәндәрҙең ҡатнашмаһына ла оҡшап китә. Сөнки математиканы белмәһәң, ундағы йылдарҙа, быуаттарҙа, даталарҙа буталып бөтөүең мөмкин, химияны белмәһәң, ҡулыңа килеп эләккән тимер киҫәгенең ниндәй әһәмиәтле ҡатнашма икәнлеген белмәй аяҡ аҫтына ырғытып ҡуйыуың да ихтимал. Әгәр инде хәрефтәрҙе, телде белмәһәң, мауыҡтырғыс ваҡиғалар һүрәтләнгән, тарихи сығанаҡтарға нигеҙләнеп яҙылған әҫәрҙәр менән танышыуҙан да мәхрүм ҡаласаҡһың...**
**Ләкин тарих, башҡа өлкәләрҙән айырмалы, хаталары йылдар, быуаттар буйына асыҡланған фән булыуын да онотороға ярамай. "Аҡ таптар" әленән-әле килеп сығып тора. Тик нисек итеп тарихи хәҡиҡәткә хеҙмәт итергә һуң, ғөмүмән, был мөмкинме? Ошо хаҡта тарих фәндәре докторы, профессор Нияз МӘЖИТОВтың уй-фекерҙәрен белештек.**



**➔ Медицина йәки химия, нефть химияһы өлкәһендәге бер хата кеше ғүмерен өҙөүгә килтереүе мөмкин, ә тарихи хатаның эҙемтәләре ниндәй булыуы ихтимал?**

- Һәр кешенең шәхси үҙенә, ғаиләһенә ҡағылған, һәр халыҡтың үҙенең дөйөм тарихы бар. Ғаилә, халыҡ тарихына асыҡлыҡ, аныҡлыҡ, дөрөҫлөк индереү тиҙ генә эшләнә торған эш түгел. Ҡатмарлы әҙерлек, тикшеренеү эштәре алып барыуҙы талап итә. Ул - халыҡтың хәтере. Халыҡ хәтере легендалар формаһында йәшәй, яҙма документтарҙа - тел тарихында, антропология, этнография, археология һәм башҡа фән төрҙәренең сығанаҡтарында сағылған. Тарихи хәҡиҡәтте асыҡлар, табыр өсөн шуларҙың барыһын да ентекләп тикшереү, өйрәнеү талап ителә.

Тарихты фәнни яҡтан тикшереү - үҙе бер ҡатмарлы күренеш. Ул тарихи документтарҙы тикшереп, шунда булған мәғлүмәтте асыҡлап, халыҡҡа еткереү, сығанаҡтарҙы ҡарап сығыу менән генә сикләнмәй. Шул документтарға һәр тарихсының шәхси позицияһы бар. Уны эмоциональ форма тип тә әйтәләр. Шуға бер үк мәғлүмәт тарихсыға төрлөсә йоғонто яһай, төрлө тарихсы уны төрлөсә ҡабул итеүе мөмкин. Бөтә ғүмеремде тарихҡа бағышлаған кеше булараҡ, мин шуларҙың барыһын да күреп йәшәйем. Үҙемдә лә, башҡаларҙа ла ундай сикләнеүҙәр бар.

Ысынлап та, тарихҡа асыҡлыҡ, аныҡлыҡ индереү тиҙ генә хәл ителмәй. Оҙаҡ йылдар барған тикшереүҙәр генә аныҡ һөҙөмтәгә килтереүе мөмкин. Ҡайһы бер тарихи төшөнсәләр буйынса быуаттар буйына тикшеренеү кәрәктер. Иң тәүҙә ул төҫмөрләүҙән башлана. Артабан уй-фекерҙәр тыуа. Тәүҙә бер документты тикшерәһең - бер төрлө, икенсе документ бөтөнләй икенсе төрлө булыуы ихтимал. Шуға күрә төрлө фекерҙәр бар, шулар араһында дөрөҫтәре, ялғандары була. Һөҙөмтәлә төрлө фекер айырмалыҡтары барлыҡҡа килә. Тағы ла бик томанлы ғына, асыҡ булмаған фекер ҙә йәшәй.

Тарихтағы хаталар, яңылышлыҡтар, әлбиттә, тарихты боҙоп күрһәтеүгә килтерә. Ләкин тарих дөрөҫмө, түгелме икәнлеген ғалимдар үҙҙәре генә белә. Тарих менән шөғөлләнмәгән, уның менән ҡыҙыҡһынған ғына кешеләрҙең күбеһе быны профессиональ кимәлдә аңламай. Нисек биргәнһең - шулай ҡабул итәләр, әммә тарих менән фәнни шөғөлләнгән тарихсылар үҙ-ара бәхәсләшә, төрлө дискуссиялар ойоштора, был бәхәстәр тиҫтәләгән йылдар, быуаттар буйына бара һәм барыбер дөрөҫлөк тантана итә. Был бәхәсләшеүҙәр - фекер айырмалыҡтарын минимумға еткереүгә тырышыу ғына ул.

Мин Мәскәүҙә Археология институтында диссертация яҡлағанда бәхәстәр биш сәғәт самаһы барҙы. Төрлө фекерҙәр яңғыраны. Шунда бер профессор һығымта формаһында ҡыҙыҡлы бер фекер әйтте. Мәҫәлән, парашютсы һикергәндә бер яңылышлыҡ эшләһә, парашюты асылмай һәм ул һәләк булыуы мөмкин. Тарих фәнендә хаталар, яңылышлыҡтар булһа ла, ул барыбер үҙенсә бара, бер кем дә һәләк булмай, кеше ғүмерҙәре өҙөлмәй, тигәйне. Тарих фәнендәге фекер айырмалыҡтары, бәхәстәр ғәмәлдә бар, булған һәм артабан да буласаҡ, тап шул нигеҙҙә тарих фәнендә алға китеш, үҫеш күҙәтелә лә инде. Шуның өсөн тарих фәне ҡыҙыҡ та.

**➔ Тарихи хәҡиҡәткә хеҙмәт итеүсе тарихсы ниндәй сифаттарға эйә булырға, ниндәй принциптарҙы алға ҡуйырға тейеш?**

- Дөрөҫ тарихты ысынбарлыҡҡа ҡайтарыу, хәҡиҡәтте халыҡҡа еткереү өсөн ысын мәғәнәһендә тарихсы булған кеше объектив фекерҙә булырға; документтарҙа, тарихи сығанаҡтарҙа булған мәғлүмәттәрҙе һис боҙмайынса, шуларға анализ, һығымта яһап, тарихи хеҙмәт яҙырға; үҙ-үҙенә бик талапсан; фекер айырмалыҡтары булған ғалимдарға бик иғтибарлы; үҙенең фекерен башҡаларҙыҡы менән сағыштырырға; үҙ-ара булған тәнҡит һүҙҙәренә, бәхәстәргә бик сыҙамлы ҡарарға тейеш. Шул ваҡытта ғына беҙ фекер айырмалыҡтарын тыныс рәүештә генә аша сығып, дөрөҫлөккә, хәҡиҡәткә яҡынаясаҡбыҙ.

**➔ Тимәк, тарихсыларҙы бер үк ваҡытта үткән, бөгөнгө һәм киләсәк заман менән йәшәй, тип әйтергә була инде, сөнки улар тарихты бөгөн, әммә киләсәк быуын өсөн яҙа...**

- Беҙ тарихты, ысынлап та, киләсәк быуындар өсөн яҙабыҙ. Һәм тарихсы үҙ хеҙмәттәрен яҙған ваҡытта киләсәк быуын тарихты дөрөҫ аңлаһын тигән ҙур яуаплылыҡ тойоп йәшәргә, эшләргә тейеш.

**➔ Тормошобоҙҙоң ниндәй генә өлкәһен алып ҡараһаҡ та, сәйәси процестар уларға ныҡ йоғонто яһай. Тарихсыларға сәйәсәт йоғонто яһаймы?**

- Сәйәсәттең йоғонтоһо шул тиклем көслө. Мәҫәлән, тарих фәненә хеҙмәт итеүсе күренекле, белемле, дәрәжәле ғалимдар ысын мәғәнәһендә тарихсыларҙы мәктәп, вуз йылдарынан, аспирантура йылдарында уҡ һайлап алып әҙерләй, бөтә белгәнен уҡыусыларына бирергә тырыша. Үҙ аллы эшләй башлағас, уларҙың уҡыусылары үҙҙәрен уҡытыусыларына, иптәштәренә ниндәйҙер кимәлдә бурыслы итеп тоя. Уҡытыусыһының фекерҙәрен ҡабатлай, уларға эйәреп яҙа. Ләкин, ысынбарлыҡта, ысын мәғәнәһендә ғалим булған уҡытыусының уҡыусылары билдәле бер ваҡыт үткәндән һуң уҡытыусыларын белем яғынан уҙып китергә тейеш. Әгәр уҡыусыларың һинең менән тиңләшмәй, һине уҙып китмәй икән, тимәк, булған үҫеш шул кимәлдә генә ҡала бирә.

Мин күреп, һиҙеп йөрөйөм: йәш ғалимдар йыш ҡына фәнни хеҙмәттәрендә, бәхәстәрҙә объектив түгелдәр. Ысын мәғәнәһендә үҙен тарихсы тип һанаған кеше тарихи фекерҙәрен үҫтергәндә үҙ аллы булырға, бер ниндәй сиктәргә инмәйенсә, тарихи сығанаҡтар ниндәй фекергә килтерә, шуны яҡларға тейеш. Әгәр фекереңде кемгәлер эйәреп кенә яҙһаң, тарихи үҫеш күҙәтелмәй, ул туҡтап ҡала, фекер ҡулайлаштырылған фекергә әйләнә. Ғөмүмән, тормошта булған ҡаршылыҡтар фәндә лә һиҙелә. Әгәр уҡыусылары уҡытыусыһының ниндәйҙер фекеренә ҡаршы килеп, үҙ фекерҙәрен дәлилләй алһа, был инде ғалим өсөн оло шатлыҡ. Ләкин һәр фекер тарих фәненә зыян килтерерлек уйҙырма түгел, төплө дәлилле булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тарих башҡа фәндәрҙән нимәһе менән айырыла? Унда уйҙырмаға урын юҡ. Фекер айырмалыҡтары булғанда ла, йылдар үткәс, ваҡыт һәр нәмәне үҙ урынына ултырта, дөрөҫлөк, хәҡиҡәт барыбер тантана итә.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*



# НАМАҘ УҠЫЙЫҠ -
## ул һаулыҡ сығанағы ла

**Намаҙ уҡыу тәү сиратта рухи таҙарыныу, иманды нығытыу өсөн кәрәк. Әммә намаҙҙың физик тәнгә сәләмәтлеге тураһында ла онотороға ярамай. Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тип юҡҡа ғына әйтелмәй бит.**

Намаҙ, беренсенән, нервылар системаһына бик ыңғай тәьҫир итә. Намаҙ уҡығанда кеше ғәйрәтләнеп, асыуланып ултырырға тейеш түгел бит. Тимәк, ул үҙ-үҙен, минең нервылар көйлө, зиһенем камил, тип ышандыра, тынысландыра. Тәһәрәт алыуы, матур кейемдәр кейеп намаҙға баҫыуы кәйефен дә күтәрә.

Икенсенән, ғәрәп телендә уҡылған доғалар энергетик көскә эйә. Намаҙ уҡыусы үҙендә ыңғай, яҡшы энергия туплай. Өсөнсөнән, намаҙ физик ағзаларҙың сәләмәтлеген һаҡлаусы бер сара булып тора. Тик ултырғанда, хәрәкәт итмәгәндә ҡан аяҡҡа китә. Намаҙ уҡыған ваҡытта иһә ҡан йөрөшө әүҙемләшә, был үҙ сиратында ағзаларҙың яҡшыраҡ эшләүенә булышлыҡ итә. Кеше эйелеп сәждәгә киткәндә, баш мейеһе ҡан менән тәьмин ителә. Мейе күҙәнәктәре яҡшыраҡ эшләй башлай. Шуға күрә намаҙҙа булғандар хәтер юҡлыҡҡа зарланмай, уларҙа склероз кеүек сирҙәр осрамай. Даими эйелеү күҙҙең ҡан баҫымын бер кимәлдә тоторға, шулай уҡ йыш осрай торған күҙ ауырыуы - ҡара ҡылауҙан һаҡланырға булышлыҡ итә. Тағы ла үпкә, йөрәк, тәндең өҫкө өлөшөндәге башҡа ағзаларҙың эшмәкәрлеге яҡшыра, ҡан тамырҙары нығый. Намаҙ уҡыған кешенең тын алышы яйға һалына. Был үҙ сиратында ҡан баҫымының көйләнеүенә булышлыҡ итә.

Намаҙ ваҡытында бөтә тән мускулдары әүҙемләшә. Был арыу-талыуҙы бөтөрә, быуындар һыҙлауын баҫа. Тимәк, намаҙ үҙенә күрә бер физик күнекмә булып тора. Ололар, ғәҙәттә, физик күнекмәләр эшләмәй. Әммә, иғтибар итегеҙ, намаҙҙа булған оло кешеләр һәр ваҡыт үҙҙәрен яҡшы формала тота. Улар тиҙ хәрәкәт итеүсән, әүҙемдәр, һаулығына зарланып бармайҙар. Тимәк, намаҙ уҡыу - көнөнә биш тапҡыр физик күнекмәләр эшләү тигән һүҙ. Бынан тыш, һөйәк туҡымаларының минералдар менән әүҙемерәк тәьмин ителеүе бигерәк тә ололар араһында йыш осрай торған остеопороз кеүек сирҙәрҙе һирәгәйтә.

Кеше ауыр операция кисергән йәки уға эйелергә ярамай икән, ул барыбер намаҙын ҡалдырмаҫҡа тейеш. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, эйелеп уҡый алмайһың икән, ултырып уҡы, ултырып уҡый алмаһаң, ятҡан килеш уҡы. Кеше хәрәкәт итә алмаһа, керпектәрен ҡыймылдатып булһа ла намаҙ ҡылырға тейеш. Был осраҡта ул тиҙерәк һауығасаҡ.

Шулай итеп, намаҙ рухи сәләмәтлекте лә, физик һаулыҡты ла яҡшырта. Кеше көн дауамында организмын төрлө йәһәттән контролдә тота, көйләп тора, үҙ-үҙе менән идара итә. Тимәк, ул көн дауамында арымай-талмай, дәртле, тыныс, күтәренке кәйефтә, ауырлыҡтарға бирешмәй йөрөй тигән һүҙ.

**Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА,**
**медицина фәндәре докторы,**
**профессор.**

✓ *Алдағы йыл килер бер ғәҙел батша, йә булмаһа бәйғәмбәр рәүешендә күктән берәү төшөр ҙә, милләтте ҡотҡарыр, тип ышанмайыҡ. Милләтебеҙҙе һәр ҡайһыбыҙ үҙебеҙҙең ғаиләбеҙҙә генә ҡотҡара ала.*

# АЖДАҺАҒА

## ул беҙҙе йотолоуҙан

**Аждаһаға ҡарата донъяла төрлөсә мөнәсәбәт бар. Ҡайһы бер халыҡтар уны бар тереклекте йотоусы мифик зат, ҡайһылары бер башын сабып өҙһәң, урынына бер нисә баш үҫеп сығыусы йылан, ҡайһылары яҡшы тамамланыусы әкиәттең изге сифатлы геройы итеп күрә. Беҙҙе иһә бала саҡта уның исеме менән ҡурҡыттылар. Ҡытайҙар өсөн Аждаһа изге мифик зат, уға хатта һәйкәл дә ҡуйғандар. Һәйкәлдең бейеклеге 30 метр, оҙонлоғо 21 километр,тиҙәр. Барҙыр. Оҙонлоғо ике мең ярым саҡрымға һуҙылған Ҡытай стенаһы төҙөгән милләт бит ул.**

**Нисек кенә булмаһын, Көнсығыш календары буйынса 2012 йыл Аждаһа йылы тип билдәләнгән икән, тәбиғәттә ундай зат булмаған хәлдә лә, Аждаһа хаҡындағы әкиәткә барыбер ышанғы килә. Шундай әкиәттәргә ышаныу беҙҙе был донъяла йәшәтә бит.**

**Шуға күрә Иҫке йылды оҙатып, Яңыһын ҡаршылаған саҡта Аждаһа йылында тыуған әҙиптәрҙе, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаларын, Хәсән Назар әйтмешләй, өфәндәй ир-азаматтарҙы ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ. Ир-азамат, тигәндәй,ул егеттәрҙең береһенең исеме, ысынлап та, Азамат, фамилияһы Юлдашбаев, беҙ уны йәштәр һәм башҡалар яратып уҡыған "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире, тәрән фекерле журналист, иң ҡыҫҡа шиғырҙар яҙыусы шағир итеп тә беләбеҙ. Азаматтың атаһы Рәмил булһа, икенсе ҡунағыбыҙ ҙа Рәмил, фамилияһы Йәнбәк, ул әҙәбиәтебеҙ көҙгөһө булған "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Әмир Әминевтың ул командировкала йә отпускыла саҡта креслоһын баҫып ултырыусы урынбаҫары Рәмил – башҡорт шиғриәтенең иң мөхәббәтле шағиры.**

**Өсөнсө ҡунағыбыҙ – радио тыңлаусыларға үҙенең "Һаумыһығыҙ, ерҙәштәрем!" тип башланып киткән радиотапшырыуҙары менән таныш прозаик, журналист, "Юлдаш" радиоһының ижтимағи-сәйәси һәм нәфис программалар бүлеге етәксеһе Рәсүл Сәғитов.**

▸ **Яңы йыл алдынан яңы Дәүләт Думаһы һайланыҡ, йылдың тәүге сирегендә Рәсәй Федерацияһының яңы президентын һайлаясаҡбыҙ, ҡыҫҡаһы, яңырабыҙ, йәмәғәт! Шул уҡ ваҡытта Ҡуян йылынан ҡурҡа-ҡурҡа Яңы йылға аяҡ баҫыуыбыҙ булыр, Аждаһаның ауыҙына барып та инербеҙ. Етмәһә, ул кәбисә йылы һәм, 2012 йылдың декабрендә ахырызаман етәсәк, тип тә вәғәҙә итәләр. Бына һеҙ, Аждаһа йылында тыуған кешеләр булараҡ, донъялағы, илдәге, үҙебеҙҙәге көтөләсәк ваҡиғаларҙы яҡшыға юрай алаһығыҙмы? Иҫке йылды нисек оҙатаһығыҙ, яңыһын нисек ҡаршылайһығыҙ?**

**Р. ЙӘНБӘК:** Ил башында элекке команда ҡалғас, мин әллә ниндәй ҙур үҙгәрештәр булыр тип уйламайым. Ә шәхси планда ҡарағанда, 2012 йыл – минең йылым, пенсияға сығыуымды оло тулҡынланыу менән көтәм. Ысынлап та, пенсияға сығыу нисек була икән? Бер мәртәбә сығып ҡарамағас, белгән юҡ. Әле бына нәшриәттә эшләүсе ҡыҙҙар һәм егеттәрҙең тырышлығы менән сығып килгән "Тамғалы заман" тип аталған китабымдың корректураһын уҡып бирҙем. Хәҙер яҙыусыға 5 йыл һайын ғына китап сығарыу мөмкинлеге бирелгәс, был китабым һайланма әҫәрҙәрҙән инде, әлбиттә, унда яңы шиғырҙарым да урын аласаҡ.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Китабың сығып килеүе менән ҡотлайбыҙ, Рәмил абзый, һайланма китабың һыйланма китапҡа әүерелһен! Ә әңгәмә предметына килгәндә, минең календарҙа ике байрам юҡ: береһе – тыуған көн, икенсеһе – Яңы йыл байрамы. Сөнки, йыһан киңлегенән ҡарағанда, тәүлек, сәғәт, аҙна, ай, йыл тигән үлсәмдәр юҡ, унда бары тик мәңгелек кенә тигән төшөнсә бар. Ә йыл исемдәрен кешеләр ниндәйҙер иҫәп алып барыу өсөн шартлы рәүештә генә бүлгән. Минеңсә, әҙәм балаһы өсөн ике генә үлсәм бар: тыуым һәм үлем. Ә донъя кимәлендә ҡарағанда, кешелектең барлыҡҡа килеүе һәм заман ахырылыр, моғайын. Шуға күрә кемдәрҙендер Ҡуян йылы, Аждаһа йылы тип ҡул йә бот сабыуына битарафмын, был минең өсөн бер ниндәй ҙә әһәмиәткә эйә түгел. Яңы йыл, эйе, бала-сағалар өсөн байрам, ә мин Хоҙай уны миңә лә биргәненә шөкөр итеп йәшәйем.

Сәйәси юҫыҡта ҡарағанда, беҙ күп нәмә менән ҡәнәғәт булмаусы халыҡ, граждандар. Ғөмүмән, халыҡ, электорат төшөнсәһе ҡәнәғәт булмаусылар, тигәнде аңлата. Кемдеңдер күркәһе ҡабарыңҡыраҡ, кемдеңдер этенең тауышы сағыуыраҡ икән, һәр ваҡыт кеше нимәгәлер ынтыласаҡ һәм, нимәгәлер риза булмайынса, ғәйепләне эҙләйәсәк. Беҙ күп йәһәттән хөкүмәтте, дәүләтте әрләргә әҙер, был аңлашыла ла. Көнсығыш илдәрендә "Һиңә үҙгәрештәр заманында йәшәргә яҙһын" тигән киң таралған бер ҡарғыш бар. 1989 йылда институт тамамлағандан алып минең барлыҡ аңлы ғүмерем үҙгәрештәр заманында үтә. Ә мин үҙгәрештәрҙе теләмәйем, сөнки "Яҡшы һуғышҡа ҡарағанда яман булһа ла солох яҡшы" тип тә әйтәләр. Минеңсә, донъяуи кимәлдә ниндәйҙер сәйәси фекерҙәр йөрөткәнсе, өйөңә ҡайтып балаларыңдың күҙенә ҡарау, уларҙың тын алышын тойоу дөрөҫөрәктер. Әгәр ҙә ашарыңа, өҫтөңә кейергә һәм йәшәргә урының бар икән, ана шуның иң ҙур ҡыуаныс икәнен аңла. Беҙ ниндәйҙер әйберҙең затлырағы артынан ҡыуып, булғанының ҡәҙерен тоймайбыҙ. Элек беҙ булмаған аҡсабыҙға нимә алырыбыҙҙы белә инек, бөгөн магазинға инһәк, үҙебеҙгә "Нимә алайым икән?" тигән һорау бирәбеҙ. Туйып һикереүҙән ҡурҡайыҡ та бер-беребеҙгә рәхимлерәк, иғтибарлыраҡ, ихтирамлыраҡ булайыҡ, сөнки иң ҙур бәхет, иң ҙур ҡыуаныс һәр кемдең үҙенең эргәһендә. Батша алышыуы менән дә, БМО етәксеһе алышыу менән дә, урындағы хакимиәт башлығы алышыу менән дә һине үҙеңдән башҡа бер кем дә бәхетле яһай алмай. Һин үҙеңде үҙең һәм ошо булған шарттарҙа ғына бәхетле итә алаһың.

**Р. СӘҒИТОВ:** Мин Яңы йыл, тыуған көн һәм башҡа байрамдарға фәлсәфәүи күҙлектән ҡарайым. Яңы йыл рәсми рәүештә 31 декабрҙә тип ҡаралһа ла, күңелдә ундай бүленеш юҡ. Мосолман календары буйынса ҡараһаң, ул яҙ башлана, элек уны сентябрҙә ҡаршылағандар. Шулай ҙа, рәсми рәүештә йыл башын ниндәйҙер датаға билдәләгәндәр икән, ошо илдә йәшәгәс, беҙ ҙә шуға ҡарап йомғаҡ яһайбыҙ инде. Беҙҙең халыҡта яманлау тигән төшөнсә юҡ, шуға күрә үткән йылға ниндәйҙер "насар" йә "яҡшы" тигән мөһөрҙәр ҙә тағыу урынһыҙҙыр. Һәр йылдың үҙ йәме, үҙ биҙәге булалыр. 2010 йыл ҡоро килде, тип зарланһаҡ, унан алдағы йылда иҡтисади көрсөк тип көрһөндөк. Быны үтеп барған 2011 йылда ла ҡоролоҡ көткәйнек, киреһенсә, бик мул уңыш йыйып алыуға өлгәштек. Шәхси планда ҡарағанда, йылдың яҡшы килеүе үҙемдең эшемдә лә сағылды, үҙ иҫәбемә булһа ла китабымды сығарыу мөмкинлеге булды. Уның Яҙыусылар союзында презентацияһы үтте.

Йондоҙнамәләргә бөтөнләй ышанмайым, сөнки беҙ Ислам динле милләт. Ислам дине төрлө ышаныуҙарҙы шайтан эше тип баһалай. Сәйәси тормошҡа килгәндә, бында иң тәүҙә һайлауҙарҙы күҙ уңында тоторға тейешбеҙҙер. Беҙ һайлауҙарҙың нисек үтерен алдан белдек, шуға күрә уның һөҙөмтәләренә әллә ни аптыраманыҡ. Кемдер уның нисек үтеүенә риза түгел, был шулай уҡ аңлашыла, сөнки бөтә ил бер кешенең ауыҙына ҡарап йәшәгән замандар ҙа артта тороп ҡалды. Элек һайлау булманы, тауыш биреү генә ойошторолдо.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** 2012 йылда ла кемдәр изгелек күрергә теләһә, изгелек күрәсәк, яуызлыҡ күрергә теләһә, яуызлыҡ күрәсәк.

**Р. ЙӘНБӘК:** Мин йыл эсендәге ике байрамды ғына байрамға һанайым. Уларҙың береһе - Яңы йыл байрамы, икенсеһе – 1 Май байрамы. Ни өсөн 1 Май? Хеҙмәтсәндәрҙең теләктәш булғаны өсөн түгел, тәбиғәттең уянғаны һәм шуға ҡарап кешеләрҙең ҡыуанғаны өсөн. Ә Яңы йылды кешеләр ниндәйҙер өмөттәр менән көтөп ала. Яңы йыл алдынан кешеләрҙең йөҙө балҡыбыраҡ ҡала, иҫләүебеҙсә, 90-сы йылдарҙа ундай балҡыш күҙәтелмәне.

▸ **Аждаһаның теше – уның ашҡаҙан аҫты биҙе, тигән бер әйтем бар. Ни өсөн тигәндә, Аждаһа, бүреләрҙән, арыҫландарҙан айырмалы рәүештә, ҡорбанын теше менән өҙгөсләмәй, был функцияны уның ашҡаҙанында бүленеп сыҡҡан ашҡаҙан һуты башҡара. Боронғо риүәйәттәрҙән дә беҙ Аждаһаның йотоу хәләте хаҡында күп ишеткәнебеҙ бар. Хәҙерге заманда глобалләшеү бара, беҙ, ул донъя капиталы тип аталамы, үҙебеҙ ҙә күрмәгән һәм белмәгән көстәр тарафынан йотолабыҙ. Беҙ генә түгел, был хәлгә барлыҡ кешелек дусар. Ҡайҙан беләһең, бәлки, беҙ хәҙерге ваҡытта Аждаһаның эсендәлер, бары тик үҙебеҙҙең шунда икәнлегебеҙҙе генә белмәйбеҙҙер. Аждаһа – фантастик образ булһа ла, заман ахыры еткәндә ер асыласаҡ, унан ут бөркөләсәк тә, бар тереклек ер тарафынан йотоласаҡ. Кем белә, бәлки, заман ахыры үҙе үк ошо Аждаһаны кәүҙәләндерәлер? Милләттәрҙең ассимиляцияға бирелеүе, башҡалар тарафынан йотолоуы ла шул уҡ Аждаһалыҡ сифатына ҡаршы тора алмауына бәйле түгелме?**

**Р. ЙӘНБӘК:** Минеңсә, хәҙерге ваҡытта Өсөнсө донъя һуғышы бара. Тик ул һуғышта мылтыҡтан атмайҙар, туптар шартламай. Ниндәйҙер көстәр ҡурҡыныс образдар тыуҙырып, кешене ҡурҡытып тота, башын эйҙерергә тырыша. Әле Африкала, Азияла барған сыуалыштар, ҡан ҡойоштар донъяның байлығын бүлешеп бөтөрөү маҡсатында ойошторола. Беҙҙең илдә башланған халыҡтың һаулығына, мәғарифына һәм мәҙәниәтенә ябырылыу ҙа һуңғы сиктә шул уҡ маҡсаттан сығып аҫтыртын эш итеүгә бәйле. Әгәр илебеҙ теләһә, наркоманлыҡты, тәмәке тартыуҙы, эскелекте күптән ауыҙлыҡлар ине. Минеңсә, кешенең һаулығына зыян килтереүсе был күренештәргә "йәшел урам" асыу халыҡтың һанын минимумда тотор өсөн махсус рәүештә ойошторола булһа кәрәк. Донъя хәҙер халыҡ ҡулында түгел, ә бер төркөм кешеләрҙең ҡулында.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Әйҙә, беҙ Аждаһаны иблисләштереүҙән туҡтайыҡ. Аждаһаның һыны, ҡиәфәте, бәлки, ҡурҡыныстыр, ул шөкәтһеҙ заттыр, әммә Аждаһаның усаллығын белһәк тә, беҙ уның хәйләле зат икәнен иҫбатлай алмайбыҙ. Ул төлкө лә түгел, бүре лә түгел, айыу ҙа түгел хатта. Ул хатта балаларса бер ҡатлы зат. Ул шүрәле һымаҡ хәйләгә бармай, килеп сыға ла дошманына шунда уҡ "Алыш бармы, атыш бармы?" тигән шарт ҡуя. Ул еңелерен, алданырын алдан белһә лә, барыбер көрәшкә сыға. Булмаған ғәйепте йә булмаһа кешеләргә хас сифаттарҙы Аждаһаға япһармайыҡ.

Икенсенән, йотолоу тураһында. Мин бында шулай тип әйтер инем: әгәр ҙә һеҙ йотолоуға ҡаршы бер нәмә лә эшләй алмаһағыҙ, һеҙҙе эшкәртә алмаһындар өсөн барыһын да эшләгеҙ. Беҙҙе кем йота? Әгәр ҙә йотолорға теләмәһәк, беҙҙе бер кем дә йота алмаясаҡ. Минең балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем, Алла бойорһа, башҡортса һөйләшеп, башҡортса йырлап, интернетта ла, донъяның барлыҡ урындарында ла үҙҙәренең башҡортлоҡтарын раҫлап йәшәйәсәк. "Башҡорт бөтә", тип кемдер ҡысҡыра икән, шул кешенең ғаиләһен, эргәтирәһен ҡарағыҙ, уның эргәһендә, ысынлап та, милли мөхит юҡ. Бына минең туғандарым, дуҫтарым, яҡындарым араһында милләтем бөтмәй.

Өсөнсөнән, алдағы йыл килер бер ғәҙел батша, йә булмаһа бәйғәмбәр рәүешендә күктән берәү төшөр ҙә, милләтте ҡотҡарыр, тип ышанмайыҡ. Милләтебеҙҙе һәр ҡайһыбыҙ үҙебеҙҙең ғаиләбеҙҙә генә ҡотҡара ала. Беҙ мәҙәниәтебеҙҙе, сәнғәтебеҙҙе үҫтерәбеҙ, балаларыбыҙҙы туған телебеҙҙә уҡытабыҙ, шул уҡ ваҡытта "бөтә" тип ҡысҡырабыҙ. Йә, әйтегеҙ әле, ҡайһығыҙҙың ишеткәне бар йәһүдтәрҙең, Өфөлә йәһүд класы асайыҡ, тип йөрөгәнен. Әммә улар үҙҙәренең мәҙәни мөхитенән, рухынан, асылынан тайпылмай. Сөнки уларҙа ғаилә культы, ғаилә тәрбиәһе көслө. Беҙ егерме йыл эсендә йырларға, бейергә өйрәндек, маҡтанырға өйрәндек, әйҙәгеҙ, ергә төшәйек тә әҙәмсә, һәүетемсә етеш йәшәй башлайыҡ. Һәр кем үҙенең баҡсаһында соҡонһон, ғаиләһен ҡараһын. Бай милләт булмай, уның айырым вәкилдәре генә бай була. Коллектив бәхет тә булмай, шул коллективтың һәр бер ағзаһы бәхетле булһа, коллектив та бәхетле була. Юғары кимәлдә 2012 йылды төрлөсә иғлан итерҙәр, әйҙәгеҙ, һәр кемебеҙ 2012 йылды "Минең йылым", "Ғаиләмдең йылы", "Балаларымдың йылы", "Туғандарымдың, дуҫтарымдың, яҡындарымдың йылы" тип иғлан итһен.

**Р. СӘҒИТОВ:** Беҙҙең телдәге "Аждаһа" һүҙендә ажғырыу ишетелгән кеүек, "Дракон", нисектер, ҡоро яңғыраған һымаҡ. Ә

# Ғәйеп таҡмайыҡ,

## иҫкәртеүсе мифик зат…

бына "Аждаһаның теше – уның ашҡаҙан асты биҙе", тигән әйтемгә килгәндә, Азамат менән килешәм, беҙгә эшкәртелеүгә ҡаршы көрәшергә кәрәктәр. Мин бер һүрәт күргәнем бар: унда ҡауҙы тәлмәрйендә яртылаш йотҡан, шул уҡ ваҡытта тәлмәрйен тәпәйҙәре менән ҡоштоң муйынын быуып торорға өлгөргән. Һүрәт "Бер ваҡытта ла бирешмә" тип атала. Икенсе яҡтан ҡарағанда, Аждаһаның эсендә булыу, бәлки, насар ҙа түгелдер, сөнки унда йылы, ашарға бар. Кеше күп йөрөгән урамдарҙа басып ҡарап торорға ятарам. Майҙан тулы кеше, машиналарҙың иҫәбе-һаны юҡ, һәр кем үҙенең уйын уйлап китеп бара, балалары, ҡатыны, ире хәстәре менән йәшәй. Был дөрөҫтөр ҙә, сөнки барыбыҙ ҙа йәмғиәт гәме менән йәшәй башлаһа, үҙебеҙҙең төп маҡсатыбыҙға ла өлгәшә алмаҫ инек.

**Р. ЙӘНБӘК:** Беҙ бала саҡта тыңлашмай шаярһаҡ, өлкәндәр "Шымығыҙ, ен килә, бабай килә, алып китә!" тип беҙҙе ҡурҡыта торғайны. Аждаһанан, ахырызамандан ҡурҡыуҙы ла мин ана шундай ҡурҡытыуға тиңләйем. Мин тағы ла бер парадоксаль күренешкә иғтибар иткәнем бар: беҙҙең халыҡ аҙыраҡ йәшәгән урындарҙа уларҙың милләт булараҡ һаҡланыу инстинкты көслөрәк. Быға инаныр өсөн беҙҙең Федоровка, Бишбүләк районда-рында йә булмаһа Силәбе өлкәһендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Беҙ һәр ваҡыт нимәгәләр ҡаршы көрәшәбеҙ. Эскелеккә, тәмәкегә ҡаршы көрәшәбеҙ. Минеңсә, нимәгәләр ҡаршы көрәшеү позитив, алға хәрәкәт түгел. Беҙ нимәгәләр ҡаршы түгел, нимәләр өсөн көрәшергә тейешбеҙ. Эскелеккә ҡаршы түгел, ә айныҡлыҡ өсөн, тәмәкегә ҡаршы түгел, ә сәләмәт тормош өсөн. Тағы ла бер мәсьәлә. Уҡытыусы синыфтағы насар билдәгә өлгәшеүселәргә үҙенең иң ҙур көсөн һәм ваҡытын һала ла, яҡшы уҡыусыларға көсө һәм ваҡыты аҙ ҡала. Дөрөҫөн әйткәндә, уҡытыусы аҫтағыларҙы өҫкә тартып тигеҙләргә тырыша һәм һөҙөмтәлә яҡшы уҡыусылар иғтибарһыҙ ҡала.

Беҙгә, ғөмүмән, көрәшергә кәрәкмәй. Көрәшеү – һуңғы сик. Беҙгә үҫеш ҡәҙимге тормош рәүеше булараҡ талап ителә. Ике миллион самаһы башҡорт бар икән, һәр бер ғаиләлә беҙ сифатты үҫтереү буйынса эш алып барырға бурыслы. Беҙҙең балалар, беренсенән, туған телле, рухлы булһын, икенсенән, белемле, тәрбиәле булһын, өсөнсөнән, бай булһын. Беҙ быға саҡлы байлыҡтан оялып, кәмселек итеп күреп, бармаҡ төртөп күрһәтеп йәшәнек. Фәҡирлек ул ҡоллоҡҡа тиң. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев яҙғанса, шәжәрәңде, өләңдәрҙе, йондоҙҙарҙы белеү генә етмәй хәҙерге ваҡытта. Уларҙы белгән хәлдә лә, фәҡир булһаң, һин декорация ғынаһың.

**Р. СӘҒИТОВ:** "Һеҙ яҙаһығыҙ ҙа ул, яҙғандарығыҙҙы берәү ҙә уҡымай бит", тип әйтеүселәр ҙә бар. Ошо һүҙҙәр тәьҫирендә бер ҡәләмдәш урыҫса яҙыуға күскән икән. Мин иһә шулай уйлайым: яҙғанымды уҡырлыҡ бер генә кеше булған хәлдә лә, хатта уҡымаған хәлдә лә, үҙ туған телемдә ижад итергә тейешмен.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Мин был йәһәттән оптимисмын. Һуңғы башҡорт ҡәберендә һуңғы ҡурайсының ҡурай уйнауын көтөүселәр был мәлде көтөп еткерә алмаясаҡ. Беҙ меңәрләгән ҡурайсылар бергә уйнап, миллионлаған кеше йыйылған майҙандарҙы яңғыратасаҡбыҙ әле.

► **Аждаһа бер ваҡытта ла иллюзияларға бирелмәй, магияға ышанмай, ысынбарлыҡҡа тура ҡарап көн итә. Бәлки, уның йотоу халәте лә нескә тойғоларға бирелмәүенә бәйлелер. Йотоу, тигәндән, халыҡта матур ҡыҙға ҡарата "ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ" тигән билдәләмә бар. Хатта ки был әйтемде Аждаһа сығарған да кеүек. Ә бына һеҙ, Аждаһа йылында тыуған кеше булараҡ, ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ ҡыҙҙы күрһәгеҙ, ниндәй тойғолар кисерәһегеҙ? Ул ҡыҙға ҡарата бары тик ишара менән генә мөнәсәбәт белдерергә мөмкин булған осраҡта ла, ул ишара ни рәүешле булыр ине?**

**Р. СӘҒИТОВ:** Аждаһаның бит ауыҙынан ут бөркөлә, мин уны алыҫтан тороп тыным менән генә йылытыр инем. Эстән генә "Эх, әгәр һуңыраҡ тыуһам..." тип эстән генә уйлар инем.

**Р. ЙӘНБӘК:** Мин ауыҙымдан ялҡын бөркмәҫ инем, күҙҙәремдән йылылыҡ ебәрер инем дә "Мин, әсәһе, тағы ғашиҡ булдым. Бынһы ла һиңә оҡшаған", тигән тағы бер шиғыр яҙыр инем.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Ә мин Кинг-Конг һымаҡ, усыма ғына ултыртып, гүзәллеге менән һоҡланып, ләззәтләнеп: "Бар ос, күбәләгем!" – тип әйтер инем.

► **Телевизорҙан барған "Арыҫлан" ир-азаматтар клубының бер ултырышында күп ҡатынлылыҡ хаҡында һүҙ сыҡҡас, клубтың иң көлкөлө ағзаһы, билдәле йырсыбыҙ Вәхит Хыҙыров "Икәүгә хәл етә, өсәүгә етеңкерәмәҫ" тигән тарихта ҡалырлыҡ һүҙ әйтте. Рәсүл, һин уның һүҙенә ниндәй комментарий бирәһең һәм, ғөмүмән, был мәсьәләгә үҙеңдең мөнәсәбәтең нисек?**

**Р. СӘҒИТОВ:** Мин уның әйткән һүҙҙәренә комментарий бирмәйем, әйҙә, үҙе бирһен. Күп ҡатынлылыҡ беҙҙең илдә закон нигеҙендә тыйыла, һин бер ваҡытта бер генә кешегә өйләнә алаһың, ҡыҙҙар ҙа бер генә кешегә кейәүгә сыға ала. Ә бына милләтең һан яғынан үҫешен уйлағанда, кейәүгә сыҡмай ҡартайған ҡыҙҙарҙың күбәйеүе, өҫтәүенә, ирҙәрҙең һан яғынан ҡатын-ҡыҙҙарҙан әҙерәк булыуы йәмғиәтте борсоуға һалырға тейеш түгелме ни? Мин тапшырыуҙа ошо фекерҙәрҙе әйткәйнем, күптәр быны шәхсән үҙемә ҡағылған мәсьәлә тип аңлап, ҡатынымды урамда осратып, минең нисә ҡатын менән йәшәп ятыуым хаҡында һораусылар булған хатта.

**Р. ЙӘНБӘК:** Егеттәр, мин бында шуны ғына әйтәм: ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирҙәрҙән күберәк булыуында беҙ ғәйепле түгел һәм ул ҡыҙҙарҙың да бәхеткә хаҡы бар.

► **Тәбиғи үҫеш юҫығында ҡарағанда, йәһүд халҡы хәҙерге ваҡытта миллиардтан артҡан булырға тейеш ине. Ғөмүмән, иң боронғо халыҡтарҙан һаналған Австралия аборигендары, гректар, әрмәндәр, дравиттар һәм башҡалар һан буйынса артыуҙы маҡсат итеп ҡуймай. Оло тормош тәжрибәһенә эйә боронғо милләттәрҙең һан яғынан артмауын нисек аңлатырға була һуң? Минеңсә, һәр бер милләттең тәбиғәтендә һаҡланыу инстинкты булып, һуғыштар, тәбиғи катаклизмдар һөҙөмтәһендә күберәк кеше ҡырылһа, был милләт оҙағыраҡ ваҡытҡа депрессияға инә, оҙағыраҡ ваҡыт аяғына баҫалыр ҙа, башын күтәрәләр. Кем белә, бәлки, был милләттәргә алда ҙур тәбиғи һәләкәт йә донъя һуғышы көтәләр ҙә, улар аҫҡы аңына һалынған мәғлүмәт буйынса үҙҙәрен арттырмай тоталыр.**

**Әгәр ҙә ошолай булмаһа, ауылдарыбыҙҙа һаҡалы биләнә еткәнсе өйләнмәгән, ҡала ятаҡтарында әбей булғансы кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙарҙың күплеген нисек аңлата алабыҙ һуң?**

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Минеңсә, һандың сифатты билдәләүе милләттәргә ҡағылмайҙыр. Һаны 40 миллиондан ашыу курдтарҙы алып ҡарайыҡ. Уларҙың дәүләтселеге лә юҡ, донъя шаулатҡан мәҙәниәте өлгөһөн дә осратҡан юҡ. Милләттә сифат беренсе урында, милләтте электорат түгел, зыялылар билдәләй. Зыялыларға мин гуманитар өлкәне генә индермәйем, уға техник, иҡтисад өлкәһе белгестәре лә инә. Һан яғынан артыу өсөн беҙ билдәле бер ваҡыт һүҙымын үтмәгәнбеҙҙер. Бөгөн беҙ һан яғынан артыу менән сифат артмаясаҡ. Иҫләһәгеҙ, Муса бәйғәмбәр йәһүдтәрҙе ҡырҡ йыл буйына сүллек буйлап йөрөткән. Сөнки ошо ваҡыт эсендә уларҙың тыуған илендә ҡол булып тыуған быуын үлеп бөтөп, яңы быуын ты-уырға тейеш булған. Тимәк, Муса үҙ иленә ҡоллоҡ психологияһынан азат халыҡты алып ҡайтҡан. Әле беҙҙең азатлыҡты тоя башлауыбыҙға егерме йыл ғына ваҡыт үтте. Халыҡ үҙен тулыһынса ирекле тойһон өсөн был ваҡыт бик аҙ. Тимәк, беҙгә тағы ла егерме йыл ваҡыт кәрәк буласаҡ әле. Ә милләтте һаҡлаусы, иҫкәртеүсе эске көскә килгәндә мин бында тышҡы көстө лә инҡар итмәҫ инем. "Урал батыр" эпосы кеүек ҡомартҡыларҙы, шундайын аһәңле йырҙар биргән халыҡты дәүләтселек, депутаттар, президенттар ғына түгел, Хаҡ Тәғәлә үҙе лә һаҡлайҙыр, моғайын.

**Р. СӘҒИТОВ:** Беҙҙең милләтте Хаҡ Тәғәлә лә, ауылдар ҙа һаҡлай. Ауыл кешеһенең нисек итеп һөйләшкәнен ишеткәнегеҙ бар бит. Бер көндө яҡташтарымдың берәһе: "Кисә төндә бынау һырт буйлап айыу үтеп китте", – тине. Үҙе ҡарап торғанмы ул айыуҙың үтеп киткәнен? Шул хәтлем матур, ыҡсым, башҡортса ғына итеп әйтте, һис бөҙрәләмәне. Беҙ геосәйәси кимәлдә милләтте һаҡлау тураһында һүҙ алып барабыҙ ҙа ул, әммә был ғына аҙ, һәр беребеҙ быны, түбән генә булһа ла, үҙенең кимәлендә башҡарырға тейеш. Ап-аҡ яғалы кеше ап-аҡ кабинетта милләтте һаҡлау буйынса ниҙер башҡарһа, ерҙә эшләүсе әҙерәк керләнеңкерәгән яғалы ҡара күлдәкле кеше лә – шул уҡ милләтте һаҡлаусы бит.

**Р. ЙӘНБӘК:** Ауылдарға ҡаршы һөжүмде милләттәрҙең үҙенсәлеген бөтөрөү өсөн эшләнмәгәнен кем иҫбат итә ала?

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Әйҙәгеҙ әле, беҙ көн һайын мәктәптән туҡмалып ҡайтып әсәһенә ошаҡлашҡан малай рәүешенән ҡотолайыҡ. Туҡмалғаны өсөн сәмләнеп, спорт менән шөғөлләнеп туҡмаусыға яуап бирергә тейеш бит туҡмалып ҡайтыусы. Әсеме-сәсәмә, яҡшымы-насармы, ысынбарлыҡты ҡабул итергә өйрәнәйек. Әгәр ҙә ауылдар шундай хәлгә ҡуйылған һәм был йәһәттән беҙ бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ икән, беҙгә XXI быуат башҡортоноң ҡала мәҙәниәтен формалаштырыу фарыз. Киләсәктә ҡала мөхите милләттәрҙе көүҙәләндерәсәк. Беҙҙең бөгөн милли ҡала мәҙәниәте саҡ формалашыу өҫтөндә. Ауылда йәшәү мөхите йылдан-йыл иркенәйә, сабынлыҡ, сәсеүлек майҙандары киңәйә, шул уҡ ваҡытта урбанистик процестар ҙа бара. Беҙҙең ҡәрҙәш милләттәр был мәсьәләне XX быуат башында хәл итә башланы. Бөгөн бөтөн халыҡтың 17 проценты ғына ауылда йәшәһә лә, ҡаланы туйындыра аласаҡ. Тимәк, ауыл халҡының ҡалаға күсеүе ҡотолғоһоҙ процесс.



### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Аждаһа йылында тыуған ир-азаматтар менән фэнтези стилендә юҡ-бар һөйләшеүгә иҫәп тотҡайным да, килеп сыҡманы. Һөйләшеүҙе нисек кенә шаярыуға, юморға борорға теләһәм дә, ул барыбер үҙебеҙҙең яҙмыш, киләсәгебеҙ хаҡында борсолоуға барҙы ла ялғанды. Азамат дөрөҫ әйтәләр, күрәһең: Аждаһаға булмаған ғәйепте таҡмайыҡ әле, йәмәғәт, ул бит беҙҙе башҡаларҙан йотолоуҙан иҫкәртеүсе мифик зат.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## Бесикә

Яҡын тирәләге сүп-сар һауыттарын ҡаса-боҫа ҡыҙырып, тәмле-татлыға ымһынып йөрөүҙән ҡойолған һеләгәйенә сәсәй-сәсәй ҡайтҡан Бесикә, мөйөшөнә барып ятты ла, уйға ҡалды. Артабан да былай йәшәп булмаҫ, ахыры, берәй йүнен табып, үҙ кәсебен асып ебәрмәһә, мәңге ас балаларын туйындыра алмаҫ. Көндән-көн күберәк ризыҡ таптырып сыйылдашҡан бесәйкәйҙәрен дә аңлай. Улар үҫәләр бит, ҡалайтаһың...

- Әсәй, давай, ашарға! Әсәй, асыҡтырҙы! - тип мыйылдашалар кемуҙарҙан. Көн һайын шул талапсан тауыштарынан ҡолаҡтары тоноп, эҙләнеп сығып китергә мәжбүр. Теләгән, һорағандарын табып бирмәһә, башҡа бесикәләр алдында уңайһыҙ ғына түгел, оят та бит әле, уның балалары кемдән кәм!

Тормош ауырайҙы. Донъя көтөүе бигерәк ҡатмарлы. Бесәйкәйҙәренә генә түгел, үҙенә тамаҡ ялғарлыҡ та ризыҡ таба алмай ҡайтҡаны бар ҡайһы бер көндәрҙә. Элегерәк ғәләмәт шәп булған икән, тип, күҙҙәрен йома-йома хистәргә бирелә ул әүәлгерәкке тормошон иҫенә төшөргәндә. Сүп-сар ҡумталары - уртаҡ! Уларҙа йәнең теләгәнсә - хыт көнө буйы, хыт төнө буйы рәхәтләнеп соҡон, бер бесик, бер бесикә лә һиңә мыяу ҙа тимәҫ, береһе лә килеп талашмаҫ, һуғышмаҫ. Ә хәҙер? Хәҙер уларға яҡынлап ҡара! Хужалары күреп ҡалһа, йөн-мөнөңдө йолҡҡолап, ҡолаҡ-молағыңды сәйнәп, бот-мотоңдо кимереп, тапҡаныңды талап ҡайтарырҙар. Сөнки бөгөн, яңы тормош талаптарына ярашлы, бөтә сүп-сар ҡумталары, иҙән аҫтары, ҡыйыҡ баштары, һәр мөйөш, һәр бер бағана хосусилаштырылған! Нимәгә һыйынайым, нимәгә һөйәнеп ҡабырғамды ышҡып алайым тиһәң дә хатта түләргә кәрәк. Шунһыҙ булмай! Бөтә нәмәгә мөнәсәбәт табыш алыу уңайлығынан ҡорола. Табыш хәҙер уйҙа, телдә, ғәмәлдә, маҡсатта, хыялда!

Элегерәк шәп, хөрриәт булған! Хужа үҙе ашап ултырған колбаса, ит киҫәген йәлләмәй Бесикәһенә ташлай ҙа ҡуя торғайны, рәхәтләнеп кимереп, елеген дә иммәгән һөйәген быраҡтыра торғайны хатта. Ә хәҙер? Колбасаның колбасаһын ҡош телендәй йоҡа ғына итеп телеп бирә, һөйәген ялтыратып ялап бөткәс кенә ташлай, унда ит түгел, һеңер, ҡойҡаһы ла ҡалмай. Ни ғәләмәттән кеше шул тиклем һаранлыҡҡа барып етте икән?

Донъя былай барһа, балаларын түгел, үҙен дә туйындыра алмаҫ. Ҡарышҡан кеүек, элек тегендә-бында сырҡылдашып сабышып йөрөгән сысҡандары ла юҡ булды. Яҡын тирәләге һарай-ҡура, келәт, кәртә, баҡса тирәләрен көнө буйы һөптәнләп һағала, ләкин бер бөртөк сысҡан осратыу түгел, еҫен дә һиҙмәҫһең! Уларына ниндәй афәт килде? Улар ниндәй һәләкәттән ҡырылдылар? Әллә һәйбәт тормош эҙләп, сит яҡтарға ҡасып китеп бөттөләрме? Бик ихтимал, сөнки элекке иген, ярма тулы келәттәрҙең эҙе лә ҡалманы, кешеләр осон-осҡа саҡ бәйләп йәшәгәнгә күрә, бөтә аҙыҡ-түлек запастарын һаҡлап, ҡәҙерләп кенә тотонорға, йәшерергә өйрәнделәр. Һуңғы ваҡытта кешеләрҙең холҡо ныҡ үҙгәрҙе, хәйерлегә булһа ярар ине. Йәшәгән урындарына берәй ҡаза янаһа, тараҡандар, сысҡандар тиҙ генә хәүеф янамаған ергә күсенәләр, ти. Бәлки, ошо ла сәбәптер? Ләкин бөтәһе лә, улар кеүек, һәр бер тауыштан ҡурҡып, һәр бер шығырҙан өркөп, тыуған ерҙәрен анһат ҡына ташлап ҡаса башлаһа, нимә була инде? Ситботта йәтеш тормош эҙләгәнрәргә йөрьәт итеүселәр юҡ. Бесикәнең "текә" холҡон беләләр, әгәр рөхсәтһеҙ-ниһеҙ уның биләмәһенә инәләр икән, сапсылмай, тешләнмәй, йолҡҡоланмай сығыуына берәү ҙә ышанмай. Шул буштан буш уңайлы урындарҙы файҙаланырға кәрәк! Уйлағанын эшләне: тәүҙә яйлап йөрөп биләмәләрен ҡарап сыҡты. Йәтешерәк, уңайлыраҡ урындарын барланы. Бер-ике көн уйланып, тәүәккәлләп йөрөнө лә кәсебенән уңырына камил ышанды һәм оҙаҡҡа һуҙмай, үҙ кәсебен яйға һалырға ниәтләне. Ниәтләү генә түгел, ихлас керешә. Элекке колхоз фермаһы яғындағы сауҡалыҡгәс, ахыры, көҙгә ҡарай, Бесикә әзмәүерҙәй ике арҙан бесикте һаҡсылар итеп ялланы. Улар яуызлыҡ, яһиллыҡтары менән ошо тирәләгеләргә электән билдәле булғас, еңел ризыҡҡа ымһынып йөрөүселәр урлыҡ, бурлыҡтан тыйылды. Алйыуҙан күҙҙәре майланып, тамшаныуҙан ауыҙҙары салшайып йөрөһәләр ҙә, хәтәр эшкә баҙнат итмәнеләр. Кәсебе ҡәҙимге көйләнеп бара түгелме, ҡәһәр һуҡҡыры! Бесикә әкренләп кенә алыш-бирешкә, һатыулашырға өйрәнде. Ни тиһәң дә, күрше-тирәһе, таныш-тоношона урлап тапҡанын түгел, үҙенең "хеҙмәт емештәрен" тәҡдим итә! Ниңә

Урал МОСТАФИН




сә, ошо йәшәгән ерендә берәй йүнен табырға кәрәк. Башҡа ерҙәрҙә лә шул уҡ донъяның аҫтын өҫкә әйләндергән хосусилаштырыу булмаған тип беләһеңме?

Ә үҙе шул сысҡандарҙы үрсетә башлаһа? Айына бер бөртөк сысҡан тотоп ҡапҡаным да юҡ, еҫтәрен дә онотоп барам инде, тип зарланған әхирәттәре әҙме? Быna һиңә әҙер кәсеп. Нисек быға хәтлем ул кәсепкә тотоноусы юҡ икән? Әйҙә, эште үҙең башла ла, рәхәтләнеп һатыу ит, файҙаһын күр! Тулҡынланыуынан, Бесикә ятҡан еренән ырғып торҙо, кирелеп-һуҙылып, ҡойроғон болғап алды: башын юғары күтәреп, ҡолаҡтарын ҡарпайтып, күҙҙәрен ҡыҫыңҡырап, арҡаһын көмөрәйтеңкерәп, ҡойроҡ осон күтәреңкерәп, арт һынын талғын ғына ян-яҡҡа сайҡап, алғы тәпәйҙәрен бер һыҙыҡҡа ғына баҫып, әхирәттәре алдынан һәлмәк кенә атлап ғорур үтеүен күҙ алдына килтереп, мырылдап ҡуйҙы. Хәҙер бит бөтәһе лә уға киләсәк. Былай ғына түгел, һоранып, инәлеп, ялбарып киләсәк.

Бесикәнең хужалары ҙур булмаһа ла, иркен айырым йортта тора. Кәртә-ҡура, келәте, баҡсаның бер мөйөшөндә мунсаһы бар. Шуларҙың ҡыйыҡ баштары, иҙән аҫтары кем менән уртаҡ? Әүәлдән ул урындарға Бесикә үҙе генә законлы хужабикә. Күрше-тирәләре ингеләп йөрөй ул ҡайһы берҙә, ләкин юл ыңғайы йә март айҙарында ғына, ә былай иркенләп кәсепкә инеп йөрөп, тиреләрен үтә тешләмәй, муйындарын бормай ғына тотоп алып ҡайтҡан сысҡандарын айырым-айырым ҡумталарға урынлаштырҙы. Инә сысҡан менән бер ҡумтаға икенсе тапҡыр алып ҡайтҡан ата сысҡанды ултыртты, ата сысҡан әләкһә, уға инәһен ҡушты. Үҙенең ауыҙынан өҙөп тигәндәй уларҙы һәйбәт ашатты, эсерҙе. Тырышлығы күп тә көттөрмәй һөҙөмтәләрен бирҙе: ҡумталарҙа сысҡандар ҡәҙимге үрсеп китте бит, әй! Тирә-йүнгә, танауҙарҙы ҡытыҡлап, татлы сысҡан еҫтәре таралды. Үәт, ғәжәп! Үәт, ҡыуаныс! Яйлап ҡына уларҙы шул кәртәләнгән ерҙәрендә иреккә сығып йөрөргә өйрәтте. Улары, хәрәкәтләнеп, уйнап йөрөгәс, тағы ла һәйбәтерәк ашай, ашағас, етеҙерәк үрсей башланы. Тәүҙәрәк, тырымтырағай ҡасып бөтөрҙәр, тип ҡурҡҡайны, оялары ошонда булғас, ниндәй тере йән балаларын ташлап ҡасһын инде. Көтөүе көҙгә хәтлем ҡәҙимге үрсене. Бер үҙенә ауыр ҙа була башланы, сөнки башты әйләндерерлек татлы сысҡан еҫтәре үткән-һүткәндәрҙең танауҙарын ҡытыҡлау ғына түгел, аңдарын албырғатты, йәндәрен йәрәхәтләне. Урам буйлап йәүкәләп йөрөмәһә лә, ҡыҙыҡһыныусылар күбәйҙе. Ҡыйыуыраҡ аҫҡорһаҡтар был тирәлә йыш әйләнгеләү түгел, ярыҡ-марыҡ, тишек-тошоҡтарҙан морондарын тыға башланы.

Хәләл мөлкәтенә морон һуҙыусыларҙың шайыҡтарына сәсәп, яланып йөрөгәнен һиҙоялып торорға? Кәсепте артабан үҫтерергә кәрәк! Ниәтләне - эшләне! Мунса ҡыйығы эсендә һый урыны ойоштороҙо. Ғәҙәттә, хәллеләр киләләр ҙә, үҙҙәре һайлап алған ризыҡты шунда иркенләп ултырып кимерәләр, тәмле-татлы еҫтәрҙән күҙҙәрен йома-йома ялана, мырылдашалар. Кемдеке тәмлерәк тип бәхәсләшә, маҡтанышалар, суҡынғырҙар. Уларҙың ҡыланғандарын ситтән генә күҙәтеп ултырыуы бигерәк ҡыҙыҡ. Ләкин әрәмтамаҡ елғыуарҙар ыңғайына күңел асып, тамаша ҡороп ултырырға ваҡыт юҡ. Алмашҡа алып килгенгән сыр, колбаса, котлет, икмәк киҫәктәрен ваҡлап, турап, еүешләп сысҡандарына таратырға, шул ыңғайы аҫтарын таҙартырға, башҡа мәшәҡәттәрен атҡарырға кәрәк. Шулайтмаһа, ул эштәрҙе кем эшләһен? Эшҡыуар арбаһын бер үҙе тарта бит, әлегә балалары араһынан тәртәһенә егелергә теләк белдереүселәр юҡ. Үҙе лә береһен дә көсләп маташманы: ярай, мәле еткәс, үҙҙәренән үҙҙәре кәсебенә ҡушылып китерҙәр әле, тип уйланы... Ташып тәмле-татлы ашатты, эсерҙе, йәлләне, иркәләне...

Шулай һәйбәт кенә йәшәп, ашап ятҡанда... Үҫеп килгән балалары был рәхәт ризыҡҡа күнегеп, теләһә ниндәй сәбәп, һылтауҙар табып, үҙҙәрен туйындырырлыҡ та кәсепкә йөрөүҙән тайпыла башланы. Һунарға киттем, тигән булалар ҙа, кәртә тирәһенә еткәс, шул арала әллә ҡайҙа юҡ булалар. Тәүҙәрәк был ғәҙәттәренә бик иғтибар итмәһә лә, тора-бара шикләнеүҙәре ғәмәлгә ашты. Баҡтиһәң, әсәләренән күреп, улары ла аулағыраҡ мөйөшһәйештә үҙҙәренең кәсептәрен асҡан икән, суҡынғырҙар! Үҙҙәре үрсетеп, туҡландырып, үҫтергән сысҡандары менән кәсеп итһәләр бер хәл, ҡыуаныстан башҡа хис кисермәҫ ине. Ул битһеҙҙәр әҙер ризыҡты урлап һатып, мәжлестәр ҡорорға керешкән! Бесикә әсәләре үҙ ғүмерендә ҡапмаған, татымаған нәмәләрҙе алыш-бирешкә алып ашап, эсеп, көнө буйы күҙҙәре аларып, баштары алйып тик яталар. Күмәкләшеп ултырып алйыйҙар, ҡороғорҙар! Бесикә үҙе лә йәшерәк, алабарманыраҡ сағында мейестән бөрккән йылыға иҙерәп йоҡлап китһә, башы әйләнеп, күҙҙәре тоноп, быуынһыҙ уяна торғайны. Иҫерткес хистәр кисерһә лә, хәтәр төштәр күрһә лә, иплап кенә ул ғәҙәтен ташланы: йылы, йәтеш булһа ла мейес алдында, мейес ҡапҡасы тәңгәлендәге көлдөксәгә лә ятып йоҡламаны. Сөнки алйыуҙан хәрәкәт етеҙлеге, еҫтәр тойоу һәләте кәмегәнен һиҙҙе. Хәҙер, ана, балалары шул ауырыуҙы йоҡторған. Йәлке лә, йәне лә көйә! Шундай хәрәкәтһеҙ, маҡсатһыҙ, мәғәнәһеҙ көн үткәреүҙән күҙҙәре тоноп, ҡолаҡ, ҡойроҡтары һәленешеп, бәлйерәгән кәүҙәләре һәлпәйешеп, йөндәре ойошоп, ҡарт бесәйҙәргә оҡшап ҡалдылар.

- Барығыҙ, исмаһам, күмәкләшеп кәсепкә йөрөп килегеҙ, ҡанығыҙ таралыр, оҫталығығыҙ артыр, - тип мыйылдап ҡарай, тегеләре:

- Әй, ҡуйсәле! Ояла бөтәһе лә барҙа йөн-тирене ойпалап, теш-тырнаҡ һындырып йөрөүҙә ни мәғәнә? Беҙгә былай ҙа рәхәт! - ти ҙә ҡуялар.

Бесикә бер әйтте, ике әйтте. Бер-икәүһен сапсып, кәккеләп, ҡолаҡтарын тешләп тә алды, ләкин ыжламанылар ҙа. Ыжлау түгел, тештерен ыржайтып, йөндәрен тырпайтып, тәпәй күтәреп маташтылар. Уларын йәлләп торманы: ҡолаҡ-молаҡтары, елкәләренән эләктереп алып тышҡа сығарып быраҡтырҙы. Иртәгеһенә ишек алдында күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, ике бөртөк йәш сығарып ултырғандарын күргәс, йәлләп, кире индерҙе, ҡалайтһын, үҙ балалары бит. Етмәһә, өлкәнерәктәре аҙғын тормош кисереүҙән тапҡан балаларын өйгә ташыны. Улары ла хәрәм ашап өйрәнде. Өлкәндәрҙән күреп, бәләкәс кенә бесик, бесикәләр еңел-елпе йәшәүгә ғәҙәтләнде. Уларға ярар өсөн әсәләре урлаша башланы. Әсәләре тапҡан менән генә сикләнмәй, үҙҙәре лә уғрылыҡтан сикәнмәйҙер әле. Үҙенең балалары шулай булғас, башҡаларҙыҡы икенсе тиһеңме? Әҙер тамаҡлы һыймәжлес, кәйеф-сафа ҡороуҙа ҡатнашыу теләге күптәрҙе алдаҡҡа, теләнселеккә, баҫҡынсылыҡҡа өйрәтте. Анһат ризыҡ, еңел кәйеф, ғәмһеҙ тормош ғәҙәткә инде. Аулап йонсомай, баҫтырып ыҙаламай, ҡаҙынып бысранмай ғына табыш туплап, ҡапыл байып, ҡупшы ғына кейенеп, яһа-

***✓ Халыҡ бөгөн килеп балаларын туған телендә тәрбиәләй алмай ултырһынсы әле! Заманы шундай, тиерҙәр. Заманға һылтанмайыҡ әле. Элек туған телебеҙҙең тамыры ғаиләлә ине. Әле лә шулай.***

нып-һыланып, тәмле-татлы ҡабып, еңел-елпе хәбәр һөйләп рәхәт йәшәүҙе көҫәүселәр күбәйҙе, әйтәгүр. Шуғалыр ҙа хәҙер бесәй бесәйгә эттәрҙән дә хөртөрәк мөнәсәбәттә: бесәй бесәйгә дошман, юлбаҫар, иң аяуһыҙ йыртҡыс... Аждаһам һаҡлаһын!

Бесикә был хәтәр хәлдәге донъяһына хайран ҡалды: һәйбәт тормошта йәшәйем, балаларыма етеш йәшәү шарттары тыуҙырам тип тырышҡанда, бына һиңә кәрәк булһа! Бөтә изге теләктәре яуызлыҡ, яһиллыҡ, яманлыҡҡа килтерҙе түгелме? Ары нисек йәшәргә? Бесикә оҙаҡ уйланып йөрөй торғас, бер аныҡ фекергә килде: былай йәшәргә ярамай! Былай йәшәүен дауам итһә, тоҡомо үҙен-үҙе туйындырып, тәбиғи шарттарҙа йәшәү һәләтен юғалтасаҡ. Шул арала яҡын-тирәләге әшнә-әхирәттәрен, күрше-күләнен, таныш-тоноштарын саҡырып, мул һый-мәжлес ойошторҙо. Ҡунаҡтары йыйылғас, иң башта эшҡыуарлыҡтың бөтә уңайлыҡтарын, бөтә яманлыҡтарын, бөтә янау-һынауҙарын ентекләп мыяуланы, үҙенең яңылыштарын да йәшермәйнитмәй мыйылданы.

- Тоҡомоғоҙҙо ҡоротам, тиһәгеҙ, бесәйкәйҙәрегеҙҙе эшһеҙлеккә, еңеллеккә, ғәмһеҙлеккә, йүнһеҙлеккә, маҡсатһыҙ, мәғәнәһеҙ йәшәүгә өйрәтегеҙ! - тине.

Иң һәйбәте - көндәлек ихтыяждарынды ҡәнәғәтләндерерлек йүнсел булып, барын итәғәтле ҡабул итеп, ҡомһоҙланмай, сама белеп, эскерһеҙ, берҙәм, татыу йәшәүҙә икәнен аңланылар мәжлескә йыйылған бесик, бесикәләр. Шул көндән башлап, улар ҡәҙимге, электән үҙҙәренең тоҡомона хас, тәбиғи тормош менән ғәмле, сәмле, шат, бәхетле йәшәй башлағандар, ти.

### Этик

Эттең эте асылына тоғро ҡала:

Бот күтәреп бағанаға тамға һала.

Кеше эттән аҡыллы тип әйтер инең,

Бағынмаһа осраған бер "бағана"ға!

Ояһы эргәһендә мәңге моңһоу ғына ҡырын ятып өйрәнгән маһмай Этик урамда барған хәтәр үҙгәрештәрҙе күрмәй ҡалманы, әлбиттә. Ҡасан ҡарама, хужаларҙың аяғы аҫтында ураланып, ҡайһы берҙә иркәләнгән, ҡайһы берҙә типкеләнгән Бесикәнең холҡо үҙгәреүе, урамдағы хәтәр хәлдәр, сәйер хәрәкәттәр, ғәжәп күренештәр уны ныҡ һағайтты. Һағайтты ғына түгел, хатта, тамаҡтан яҙҙырҙы тиһәң дә була: аптыраныуҙарынан ҡайһы берҙә ауыҙына ҡапҡанын да сәйнәп йоторға онотто. Был ни ғәжәп? Нимә ҡылана был йолҡош Бесикә? Этиктең бәйле ятыуынан мыҫҡыл итеп, нимәһен урлап ашайым икән, тигән кеүек, көнөнә әллә нисә тапҡыр тегеләй-былай үтенгеләп йәнен үртәй торғайны, хәҙер мәж килә! Элегерәк, был алйотҡа ышаныс юҡ, тигән һымағыраҡ, ҡырҙаныраҡ урап йөрөргә тырышһа, бөгөн моронона төкөй яҙып, хатта өҫтөнән тапап тигәндәй үтеп китә. Башмаҡтай маһмайҙа эше лә юҡ! Этик был урамға хужа, тип тә белмәй, әллә юрый күрмәмешкә һалыша, әллә ысын һанға һуҡмай... Ғәжәп түгел, ғәжәптең аръяғы!

Үҙ ыңғайына ғына барған, йылдар буйына күнеккән, өйрәнгән көнитмеш, йәшәү рәүеше ҡапыл үҙгәрһә лә, күңел һипһенә, шомлана икән, ҡәһәр һуҡҡыры. Этик ятҡан еренән ҡапыл ырғып тороп ултырырға, юҡ-бар тауышҡа һиҫкәнеп, ҡолаҡтарын ҡайсыларға, һәр ҡыштырға терт-мерт итеп уянырға ғәҙәтләнеп китте. Үҙе лә аптырауға ҡалды: ул хәтлем теләһә нимәгә иҫе китә һалып бармай торғайнысы әүәлерәк, бына һиңә - тешһеҙгә тарамыш! Быға тиклем тып-тыныс күңелен һағыҙаҡ сағып китте, тиерһең, ятып сыҙар әмәле юҡ. Ырғып тороп ултыра ла, урамдағы хәл-ғәләмәттәрҙе күҙәтеп, был ни касафат икән, тип уйға бата. Иҫең аҡылың китерлек шул: ана, Бесикә нимәләр ҡылана! Айһа-ай, йүнлегә булһа ярар ине. Берәй эш боҙһа, асыуланған хужаның елле таяҡ осо үҙенә лә эләгеүе ихтимал, йәне көйгәндә кеше уны-быны ҡарап, айырып торамы һуң, кем яҡынераҡ, шуға нығыраҡ тондора! Уйлана-уйлана мейеһе ҡайнап бөтөп, һарыуы ҡайнай башланы, шикелле. Яҡынырaҡ килһә, бот сатынан эләктереп алып, күршеләрсә генә һорау ойошторор ине, ниәтен һиҙгән кеүек яҡын да килмәй бит әле, яуыз. Әллә Бесикәгә көнләшеү ҡорто саҡты микән үҙен? Көнләшерлек тә инде: ана, ҡайһылай хәтәр эшлекле булып йөрөгән була. Әллә нимәләр ҡыйрата, тиерһең! Этик Бесикәнең күтәренке күңел, һәйбәт кәйефтә булыуынан ҡурҡты, шикләнде, нимә менәндер бик әүҙем булышыуын аңлай алмай ыҙаланы: йоҡоһо осто, эсе көтөрләне, тамаҡтан тамам яҙмаҫ, тимә. Борсолорға сәбәп бар! Ниндәй ғауға ойошторап йөрөй икән тағы был бисура?

- Ай-бо-ой, йүнлегә генә булһа ярар ине-е-е, - тип олоно яман һаташып уянғанында. Ғөмүмән, башҡаларҙа һәйбәт үҙгәреш күренһә, кемдәрҙәлер уңышлыларға көнләшеү, кемдәрҙәлер оҡшарға тырышыу тойғоһо тыуа. Бының бер сере лә юҡ! Нисек инде, ул булдыра ала, ә мин ни ерем менән кәм? Мин дә булдырам, минең дә етеш, күңелле, шат йәшәгем килә, тигән сәм тыуыуы ғәжәп түгел. Ә ҡайһылайтып ул йәшәйешкә өлгәшергә һуң? Үәт быныһы инде һорау ғына түгел - мәсьәлә! Бик күп һорауы, ҡатмарлы мәсьәлә! Хәлеңдән килһә, һин дә шәп йәшә, бер кем дә ҡамасауламай...

Шул турала күп уйланып ятты билдәһеҙлек, көнсөллөк ҡортонан сағылған Этик. Ятыу ҡайҙа инде ул! Осаһына шырау ингән һымаҡ, бер урында ултырып сыҙаманы, бахыр. Сылбырҙарын шылтыратып, тегеләй ҙә йөрөнө, былай ҙа... Сынйырын һалып та йөрөп ҡараны, аптырағас. Гел генә сынйырҙа ултырмай ул, дөрөҫөрәге, ултырмаһа ла була, тик электән өйрәнгән, ҡанына һеңгән нәҫел ғәҙәтенең ҡоло: үҙен сылбырһыҙ, бәйһеҙ күҙ алдына ла килтерә алмай. Елкәһендә сылбырлы ҡайышын тоймаһа, үҙен бер кемгә лә хәжәте юҡ йән эйәһе итеп тоя ул. Шуға күрә, бәйҙән ысҡындырһалар, әҙерәк иркендә йөрөй ҙә, шул сылбыры осондағы ҡайышын тешләп: "Елкәмә кейҙерегеҙ, зинһар!" тип, инәлгән кеүек, үткән-һүткәндең күҙенә ҡарап ялбара башлай, сылбыр ҡоло, бисара. Үҙен-үҙе бәйгә ултыртып ғәҙәтләнгәс, ни хәл итәһең, ғүмере шулай үтә инде. Бәлки, уның ғәйебе юҡтыр? Тоҡом ҡанына һеңеп, быуындан-быуынға күскән алама ғәҙәттән арыныу кемгә еңел тиһең? Әйткәндәй, ул Этиктең тоҡомона ғына хас "ауырыу" түгел бит...

Бесикә ҡыланғандарының серен асам, тип уйлана, уфтаныуҙан башы ғына түгел, ҡойроғоноң осо ла һыҙлай башланы. Әрһеҙ ҡаратырыш, еҫкәнә, күҙәтә торғас, тәки аңланы көндәшенең хәтәр кәсебен. Әһә! Былай булғас, тик ятыу бөттө! Бер йолҡош бесәй эшләй алғанды мин булдырмайымдыр шул! Әмәлен оҙаҡ уйларға тура килмәне. Үҙе сынйырҙан ысҡынған һайын йәһәт кенә йүгереп барып, "тамғаһын" яңыртып йөрөгән бағанаһы кем менән уртаҡ? Бер кемгә лә кәрәге юҡ, бер кемгә лә ҡамасауламай. Шул хужаһыҙ бағананы хосусилаштырырға тулы хаҡы бар, сөнки бағана ул йәне-тәне менән һаҡлаған өй, ҡура, урам эргәһендә генә тора. Этик сылбырҙа саҡта һәр бер үткен-һүткен, йәнен көйҙөрөп, шул бағанаға ботон күтәрергә тырыша. Хәҙер ул бағанаға кем хужа икәнен танытыр! Танымаһалар, ана, йүгерһендәр икенсе бағанаға, барып етеп өлгөрһәләр! Бында йәтешләнеп килгәстәре, тегенеһенә әллә барып етәләр, әллә юҡ, унда Этиктың эше лә юҡ! Әгәр фәҡәт уның бағанаһына бот күтәрергә теләйһең икән, рәхим ит! Ләкин тәүҙә хаҡын түлә! Ә ниңә уларҙың был кисектергеһеҙ ихтыяжы буштанбуш ҡәнәғәтләндерелергә тейеш? Буш нәмә лә юҡ хәҙер. Түләһендәр ҙә, әйҙә, рәхәтләнеп һалһындар әсе тамғаларын, түләмәһәләр, тамғаһыҙ йөрөһөндәр!

Сылбырҙан ысҡынған бер көнөндә бағанаһы төбөнә сығып ултырҙы бит тәки, этйығыш. Ысынлап та, был тирәнән байтаҡтар үтеп йөрөй икән, элегерәк уға иғтибар ҙа бирмәй торғайны, бөгөн күрҙе. Баҡтиһәң, үткенселәрҙең береһе лә шул бағанаға битараф түгел: һәр ҡайһыныһы - этме, бесәйме, барыбер уның тәңгәленә етте ниһә, йәһәт кенә йүгереп килеп ботон күтәрә һала.

- Әй, туҡта, күтәрмәй тор ботонд! Бағана минеке! Тамға һалам тиһәң, тәүҙә хаҡын түлә! - тип бауылдаған тауышҡа тертелдәп, ҡайһы берәүһе, ботон күтәргән көйө шаҡ ҡатты, ҡайһыныһы, ҡурҡышынан еппәргәнен дә һиҙмәй ҡалды, ҡайһы берәүҙәре күтәргән боттарын төшөрөргә лә онотоп, өсаяҡлап сабып китте, бахырҙар.

Бағана төбөндә шул хәтлем ҡыҙыҡ хәлдәр булды тәүге көндәрҙә, хатта элегерәк яҡын да килеп урамағандары ла, ни ғәжәптәндер, фәҡәт уның төбөнә килеп бот күтәрергә теләне. Әлеге лә баяғы ҡыҙыҡһыныусанлыҡ ҡорто йөрәтә инде йән эйәһен былай хәтәр ерҙәргә. "Этик бағанаға приватизация эшләгән", тигән хәбәрҙе ишетеп, күрше ауылдарҙан килеүселәр ҙә булды. Был көндәрҙә Этик үҙен бик мөһим маһмай итеп тойҙо. Шулай булмай, ана бит, уға киләләр, уға көндәре ҡалған, унһыҙ донъяның мәғәнәһе, ҡыҙығы ла юҡ. Хәҙер эштәре көйлө! Яҡын-тирәләге эттәр, бесәйҙәр ошо, бигерәк тә уның өсөн отошло, "һәйбәт" ғәҙәттәренән яҙмаһалар, типтереп йәшәйәсәк әле. Бер генә быуыны түгел, бәлки, киләсәктә бөтә тоҡомдары ла! Үәт бит, беҙҙең бәхеткә ниндәй "башлы" маһмай ҡанбабабыҙ булған заманында, тип һоҡланыр, ғорурланыр әле көсөктәре...

### Кешекәй

Тап ошо көндәрҙә Кешекәйҙең Үҙәк баҙарҙа Бесикәй менән Этиктең көсөктәрен һатып торғанын күргәндәр...

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЗЫЯЛЫЛАР ҺҮҘЕНӘ ҠОЛАҠ ҺАЛАЙЫҠ:

## динозаврҙарҙан фәһем алайыҡ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Тамара ИСКӘНДӘРИӘ, шағирә:** Беләһегеҙме, мин динозаврҙарҙы йәлләйем. Ҙур кәүҙәле, килбәтһеҙ үлән көйшәүселәрен дә (диплодок тиҙәр үҙҙәрен), уларға һунар итеүсе йыртҡыс тиранозаврҙарҙы ла. Ни өсөн тиһәң, бахырҡайҙар 65 миллион йыл элек юҡҡа сыҡҡандар бит. Улар кешеләрҙе, кешеләр уларҙы күрмәгән. Хәҙер беҙ уларҙы өйрәнәбеҙ ҙә: "Әй меҫкендәр, баш мейеләре бигерәк бәләкәй булған инде, грек сәтләүеге хәтлем генә", - тибеҙ. Ә улар беҙҙең киләсәкте күрә алыу һәләтенә эйә булһа, аптырап: "Әй, бынау бәндәләр бигерәк бәләкәс кенәләр, ә үҙҙәре донъяны ҡайҙа алып баралар?! Беҙ 160 миллион йыл буйына бар иткән донъяны ике миллион йыл эсендә юҡҡа сығарырға йыйыналар",- тиерҙәр ине.

Йәлләүен йәлләйем дә ул динозаврҙарҙы. Улар, мейеләре бәләкәс кенә булһа ла, халыҡтарҙың гендарына инеп ултырған холоҡ-фиғелде билдәләп ҡалдырған түгелме һуң? Тәбиғәт ҡосағында ирәүәнләп йәшәү ғәҙәтен, үҙ телен, менталитетын, кәрәк булһа, үҙен аямай ерен, иркен яҡларға һәләтлекте...

Әммә халыҡ бөгөн килеп балаларын туған телендә тәрбиәләй алмай ултырһынсы әле! Заманы шундай, тиерҙәр. Заманға һылтанмайыҡ әле. Элек туған телебеҙҙең тамыры ғаиләлә ине. Әле лә шулай. Шулай ҙа әле күп ғаиләләр телде үҫтереү, һаҡлау тигән оло бурысын онотто, юғалтты. Ғаиләләрҙә ҡатнаш һөйләш - русса-башҡортса - өҫтөнлөк итә.

Хәлде бары тик башҡорт матбуғаты, башҡорт әҙәбите генә ҡотҡарып ҡала аласаҡ. Мәҫәлән, ғаиләгә "Аҡбуҙат" журналы килде, ти. Бала өсөн генә түгел, тотош ғаилә өсөн бүләк ул. Атай-әсәйҙең хәҙер бер нәмәгә лә ваҡыты юҡ. Айырыуса, туған телдә балаһы менән матур итеп һөйләшеп ултырырға ла форсат тапмай ул. Шул ваҡытта "Аҡбуҙат" ярҙамға килә. Атаһы улына әйтеп, аңлатып бирергә ваҡыт тапмаған һүҙҙәрҙе, әйберҙәрҙе ҡулығыҙға килтереп тоттора, күрһәтә. Бик күп дәрестәр аша биреп бөтөрөп булмаған белемде, фәһемде бала ошо ваҡытта ала. Әйҙә, балам, ошоно уҡыйыҡ әле, әйҙә, улым, ошо ҡул эшен икәүләп башҡарайыҡ әле, тиергә генә ҡала. Баланың күңеле үҫә. Атай-ҡартатай тауышы, әсәй-өләсәй наҙы аша һеңә милли тәрбиә. Кескәй сағындағы ошо тәүфиҡ, туғанлыҡ, булдыҡлылыҡ дәрестәрен ғүмере буйы олоғайғас та иҫләйәсәк ул.

Милләтте берләштереүсе, өҫтән имләүсе көстәрҙе барлайыҡ. Халыҡтың ныҡлығы, заман елдәренә бирешмәүсәнлеге барыбер ҙә үҙебеҙҙең ҡулда. Динозаврҙарҙан фәһем алайыҡ - бар булайыҡ.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# БАЙРАМ АЛДЫ МӘШӘҠӘТТӘРЕ... һаулыҡҡа зыян килтермәһен

**Яңы йыл алдынан әллә күпме мәшәҡәттәр ишерелде иңегеҙгә. Ошо мәлдә нисек көстө юғалтмаҫҡа һәм байрамдарҙы яҡшы кәйеф менән ҡаршы алып, үткәреп ебәрергә түбәндәге кәңәштәр ярҙам итер.**

**Йәшерен күнекмәләр.** Әгәр ҙә спорт залына йөрөргә ваҡыт ҡалмаһа, йәшерен күнекмәләр ысулын ҡулланығыҙ. Һәр эште лә фитнесҡа әүерелдерергә мөмкин. Мәҫәлән, ауыр сумка тотоп китеп бараһығыҙмы? Уларҙы гантелдәр тип уйлағыҙ һәм атлап барышлай сумкаларҙы еңелсә күтәрегеҙ. Принтерҙан күп документтарҙы сығарырға кәрәкме? Аяҡтарығыҙҙы индәр киңлегендә ҡуйығыҙ һәм балтырҙарға статистик көсөргәнеш төшөрөү өсөн уларҙы тубыҡтан бер аҙ бөгөгөҙ. Өй йыйыштыраһығыҙмы? Тубыҡтарҙы өҫкә күтәреп атлағыҙ, был аяҡтарҙың мускулдарын нығытыр. Компьютер артында ултыраһығыҙмы? Аяҡтарығыҙҙы ултырғыста ултырған көйөнә һуҙып алығыҙ, йәки янбаш һәм ултырыш мускулдарына көсөргәнеш төшөрөгөҙ. Ошо рәүешле сәғәтенә 6 минут күнекмә эшләһәгеҙ, көн һайын спорт залында 1 сәғәт шөғөлләнгәндәге кеүек файҙа аласаҡһығыҙ.

**Яҡтылыҡ өҫтәгеҙ.** Ни өсөн күп кеше ҡышын күңел төшөнкөлөгөнә бирелә тип уйлайһығыҙ? Көндәр ҡыҫҡа, төндәр оҙон булған саҡта беҙгә бары тик ҡояш нурҙары тәьҫирендә генә бүленеп сыҡҡан D витамины етешмәй башлай. Статистика буйынса, төрлө илдәрҙә йәшәүселәрҙең 20 проценты тирәһе миҙгел депрессияһына бирешеп бара икән. Был витамин аҡ майҙа, бауырҙа, диңгеҙ аҙыҡтарында, һөт продукттарында, сырҙа бар. Белгестәр файҙаһынан зыяны күп тип тыйһа ла, бик булмаһа, солярийға барып килегеҙ. Шулай уҡ хәҙер күп клиникалар яҡтылыҡ терапияһы тигән хеҙмәт тәҡдим итә. Бындай сеансты өйҙә, ҡеүәтле лампа аҫтында үҙегеҙ ҙә үткәрә алаһығыҙ. Бының өсөн электрҙы һаҡлаусы лампалар ярамай, йылы, һары-ҡыҙғылтһары төҫ кәрәк.

**Йөн әйберҙәр кейегеҙ.** Улар сағыу төҫтә булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Йылы ойоҡбаш, төрлө төҫтәге шарф, свитер, бейәләй йәки баш кейеме йылытып ҡына ҡалмай, кәйефте лә күтәрә, ти психологтар.

**Ванна инегеҙ.** Хәлегеҙ бөтөнләй бөтөп йөрөгәндә эфир майҙары өҫтәлгән йылытыусы ванналар инегеҙ. Мәҫәлән, ярты стакан һөткә 5 тамсы ҡара борос майын тамыҙығыҙ һәм ванналағы йылы һыуға өҫтәгеҙ. Аҙна дауамында көн һайын ошондай ваннала 10-15 минут ҡына ятып торһағыҙ ҙа өшөмәй башлаясаҡһығыҙ, йоҡоғоҙ ҙа яҡшырасаҡ, үҙегеҙҙе күпкә сәләмәт тоясаҡһығыҙ.

**Бәләкәй каникулдар ойоштороғоҙ.** Һеҙ декабрҙә Яңы йыл байрамы алдынан бөтөн эштәрегеҙҙе тамамлап ҡуйырға ашыҡтығыҙ һәм өҫтәмә стресс кисерҙегеҙ. Шуға ғинуар каникулдарын өйҙә, ғаилә һәм дуҫтар менән үткәрегеҙ.

**Тәм-томды күп ашамағыҙ.** Табиптар әйтеүенсә, татлы аҙыҡтар туҡланыуҙы боҙоп ҡына ҡалмай, организмдан витаминдарҙы ла йыуып сығара. Мәҫәлән, шәкәр В витаминын "ашай". Шуға балаларға татлы бүләктәрҙе күп алмағыҙ. Әйткәндәй, бәләкәстәр өсөн тәүлегенә 2 кәнфит етә. Аллергологтар өс йәшкә тиклем балаға магазинда һатылған тәм-томды бөтөнләй ашатмаҫҡа кәңәш итә. Һирәкләп һөт нигеҙендә яһалған тәмлекәстәрҙе генә, мәҫәлән, зефир, пастила, помадка, "Коровка" кәнфите, ирис ашарға ярай.

ЫШАНҺАҢ-ЫШАН...

# АЖДАҺА КӨСЛӨ ШӘХЕСТӘРГӘ ЫШАНАСАҠ,

## ғәмәлен уларға ҡарап көйләйәсәк...



**Көнсығыш календары буйынса 2012 йыл Ҡара Аждаһа билдәһенә тап килә. Ай календарына ярашлы, тимәк, киләһе йыл үҙ хакимлығына 2012 йылдың 23 ғинуарында инеп, 2013 йылдың 9 февраленә тиклем дауам итәсәк.Көнсығыш йондоҙлоғо фараздары буйынса 2012 йылдың мөһабәт хужаһы Аждаһа кемгә ниндәй мөнәсәбәттә буласаҡ икән - шул юрауҙарҙы ҡарайыҡ.**

**Сыҫҡан (1924, 1936, 1948, 1960, 1972, 1984, 1996, 2008)** йылында тыуғандарҙы ғәҙәттән тыш мажаралар көтә. Яңы йылда ентекләп уйланылған эш ағышын емереп торған хәлдәр даими килеп тыуасаҡ. Был яңынан төҙәтелеп ҡоролған пландар ярҙамында ҙур табыш алыу хаҡына эшләнә. Әлбиттә, бер нәмә лә бушлай бирелмәйәсәк. Башҡа ваҡытта Сыҫҡан хатта моронон тығырға ла баҙнат итмәгән өлкәләрҙә лә даими ҡаршылыҡтарҙы еңергә тура киләсәк. Сәйер йыл буласаҡ был Сыҫҡандар өсөн: күңелле лә, көсөргәнешле лә. Бөтәһен дә ташлап, эште яңынан башларға йә булмаһа йүнәлеште үҙгәртергә теләк тыуасаҡ, ләкин Сыҫҡан тап ана шундай бөтә нәмәгә әҙер булған халәтендә генә элек буй етмәҫлек тойолған үрҙәрҙе яулай аласаҡ. Бары тик килеп тыуған мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмау кәрәк.

**Һыйыр (1925, 1937, 1949, 1961, 1973, 1985, 1997, 2009)** йылында тыуғандар яҡшы күңелле Аждаһа тәьҫирендә үҙ шәхестәре һәм үҙен уратып алған мөхит хаҡында уйланасаҡ. Үтеп киткән йыл тыуҙырған еңелсәлек кәйефенән һуң Һыйыр тормош мәғәнәһе, кеше мөнәсәбәттәре хаҡында уйға батасаҡ. Әүҙем Юпитер планетаһы тәьҫирендә ҡайһы бер хәл-ваҡиғаларға һәм әйләнәһендәге кешеләргә мөнәсәбәте үҙгәрәсәк. Бәғзе берәүҙәр Һыйыр ышанысындағы исемлектән төшөп ҡалһа, икенселәр менән, киреһенсә, яңы ныҡлы мөнәсәбәттәр урынлашыр. Һыйыр йылы вәкилдәренең ҡайһылары үҙе һәм эргә-тирәһендәге кешеләр менән ҡәнәғәтһеҙлек кисереү сәбәпле, ығы-зығынан баш тартып, үҙ йорто һәм ышаныслы ғаиләһе сиктәрендә ял итер. Үткән йылдың шөһрәт йәрминкәһенә ҡушылып әйләнеүҙән туҡтап, Һыйыр үҙенең баҫалҡы эшсән асылына әйләнеп ҡайтыр.

**Юлбарыҫ (1926, 1938, 1950, 1962, 1974, 1986, 1998, 2010)** йылында тыуғандарҙы әүҙем һәм тынғыһыҙ осор көтә. Тормош эшмәкәрлегенең бөтә өлкәләрендә лә йәнләнеү күҙәтеләсәк. Алдан күҙаллаған ваҡиғалар үҫешен тотҡарлаусы көтөлмәгән хәлдәр килеп тыуыуы ихтимал. Бының йыл хужаһы Аждаһа кеүек үк ҡеүәтле Юлбарыҫты сығырынан сығарыу өсөн махсус рәүештә эшләнеүе лә ихтимал. Бөтөн өлкәләрҙә лә үҙгәрештәр күҙаллана. Уларҙың ыңғай яғы ла, өмөттәрҙе селпәрәмә килтерерлек емергес яҡтары ла бар. Юлбарыҫтарға көслө хис-тойғоға бирелеп, көтөлмәгән аҙымдар эшләүҙән тыйылырға, үҙ-үҙҙәрен ҡулда тота белергә кәрәк. Шул осраҡта ғына улар уңыш ҡаҙана аласаҡ.

**Ҡуян (1927, 1939, 1951, 1963, 1975, 1987, 1999, 2011)** йылында тыуғандарға йыһан энергияһы бер аҙ туҡтап хәл йыйырға һәм шәхси эштәре менән булышырға ҡуша. 2011 йыл тап Ҡуяндар билдәһе аҫтында үткәнлектән, уларға даими көсөргәнештә булырға, үҙ мәнфәғәттәренә зыян килтереп булһа ла ниндәйҙер ҙур ижтимағи ваҡиғаларҙа ҡатнашырға тура килгәйне, юғиһә. Хәҙер инде Ҡуяндар яңынан үҙ тормошоноң хужаһы булып, күңелдәренә ятҡан һәм ҡәнәғәтләндереү килтергән эштәр менән мәшғүл була аласаҡ. Яңы йыл ҡуяндарға тормоштоң бәйләнеш әһәмиәттәренә эйә булған өлкәләрендә ҙур мөмкинлектәр вәғәҙә итә. Ҡуяндар үҙҙәре өсөн файҙалы ғына түгел, ә яҡын һәм фәҡәт үҙҙәре күрергә теләгән кешеләр менән бәйләнеште һайлай алалар. Шуныһы ҡыҙыҡ: был кешеләр бәйләнешкә ихлас киләсәк һәм ҡәнәғәтләнеү менән ярҙам итәсәк. Аждаһа йылында Ҡуяндар нимәгә генә тотонһа ла, эштәре ифрат уңышлы килеп сығыр. Яңы йылда Ҡуяндар айырыуса ләззәт менән эшләйәсәк һәм шуның менән киләсәккә яҡшы нигеҙ булдырып ҡаласаҡ.

**Аждаһа (1928, 1940, 1952, 1964, 1976, 1988, 2000, 2012)** йылғылар үҙҙәре күптән көткән үҙгәрештәрҙең килеп етеүен күрер. Көтмәгәндә шул асыҡланыр: улар ниндәй шарттарҙа тороп ҡалыуға ҡарамаҫтан, хәл-әхүәлдәр менән үҙҙәре идара итә алыр. Планеталар теҙелешенең уңайлы тәьҫирендә Аждаһалар бер ниндәй абруйға ҡарап тормайынса эш итер. Әхләҡи йәһәттән икеләнеүҙәр тыуҙырған теләһә ниндәй проекттарға улар аяуһыҙ юл ябыр һәм иғтибарҙан ситтә ҡалдырыр. Бының өсөн Аждаһаның көсө лә, хакимлыҡ ҡеүәте лә етерлек. Аждаһаның абруйы үҫәсәк һәм был аныҡ эштәргә генә түгел, шәхес көсөнә лә нигеҙләнәсәк.

Аждаһалар көслө шәхестәргә ышанасаҡ һәм ғәмәлдәрен уларға ҡарап көйләйәсәк. Ошонан файҙаланып, етеҙерәк Аждаһалар үҙ тормоштарында килеп тыуған уңайһыҙлыҡтарҙан ҡотоласаҡ. Аждаһалар йыл буйына күҙ уңында буласаҡ, шул арҡала уларҙың эргәһендәгеләр был билдә эйәләренең яҡшы сифаттарын ғына түгел, етешһеҙлектәрен дә ҡабартып күрһәтергә ынтыласаҡ. Шуға күрә лә был йылда Аждаһаларға бүләк ителәсәк ихтыяр һәм ғәмәлдәр ирке менән файҙаланғанда һағыраҡ ҡыланыу кәрәк.

**Йылан (1929, 1941, 1953, 1965, 1977, 1989, 2001, 2013)** йылында тыуғандарға 2012 йыл нигеҙ булырҙай әһәмиәткә эйә оҙаҡ ваҡытлы проекттарҙы башлап ебәреүгә уңайлы мөмкинлектәр бирә. Йылан йылы вәкилдәре, күп һанлы ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, донъяға үҙҙәренең иң изге ниәттәрен еткереү өсөн етерлек дәрәжәлә көс һәм ихтыярға эйә буласаҡ. Был әле тантананың үҙе булмаһа ла, уға тәүге аҙым яһаласаҡ. Көтмәгәндә яңы юлдар асылыр. Был донъяны яҡшыртыуға йүнәлтеләсәк уй-ниәттәре Йыландың күңелендә оҙаҡ эшкәртелеп йөрөтөлһә лә, тәүҙәрәк ул көсһөҙ тойолор, ләкин был тойғо тиҙ үтәсәк. Яҡшы күңелле йыл хужаһы мәрхәмәтендә үтәсәк йыл ваҡиғалары Йыландарға үҙҙәренең идеялары үҫешен киңерәк һәм тәрән социаль кимәлдә күрергә мөмкинлек бирәсәк. Алда уларҙың юл күрһәтеүсе үҙ йондоҙҙары ҡабынасаҡ.

**Йылҡы (1930, 1942, 1954, 1966, 1978, 1990, 2002, 2014)** билдәһе эйәләре Аждаһа мәрхәмәтенән файҙаланып, алдағы йылда башлаған проект һәм эштәрен уңышлы дауам итәсәк, уларҙың эшенә ихтыяж тыуасаҡ. Ул ғына ла түгел, эш һөҙөмтәләре аҙым һайын баһаланып, түләнеп, дәртләндерелеп барыласаҡ. Шулай итеп, Йылҡы үҙенең төп призын яулауға еңеүле юртыуын дауам итәсәк. Үҙ баһаһы күтәреләсәк.




ҒИНУАР

| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | 31 | | | | | |

ФЕВРАЛЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | 29 | | | | |

МАРТ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | |

АПРЕЛЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | | | | | | |

МАЙ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | 31 | | | |

ИЮНЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | |

ИЮЛЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | 31 | | | | | |

АВГУСТ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | | |

СЕНТЯБРЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |

ОКТЯБРЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | 31 | | | | |

НОЯБРЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | | |

ДЕКАБРЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |
| 31 | | | | | | |

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

**Урта кәүҙәле ике кешеләй барҙыр был егет - Бөрйән районы батыры. Көрәш буйынса Башҡортостан чемпионы, "Салауат йыйыны - 2007" батыры исемен йөрөтөүсе тренерға нәҡ спортҡа ылығыу, сәләмәт тормош алып барыуҙы нисек башлау һәм нисек дауам итеү тураһында һорауҙар менән мөрәжәғәт иттем. Өфө ҡалаһының 1-се педагогия колледжының спорт секцияһы етәксеһе, көрәш, футбол, баскетбол буйынса тренер Илнар САЛАУАТОВтың спортҡа килергә баҙнат итмәйерәк торған студенттарҙы әйҙүкләү тәжрибәһе бар икән. Был тәжрибә менән ул беҙҙең гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашмаҡсы.**

# СПОРТ МЕНӘН ШӨҒӨЛЛӘНӘЙЕК,

## йәғни Үҙең ҡарышмаһаң, спорт ҡаршылашмай...



**➔ Үҙең ниндәй юлдар менән спортҡа килдең?**

- Көрәш менән сағыштырмаса һуң ғына, БДУ-ның Сибай институтына "Физик культура һәм спорт" бүлегенә уҡырға ингәс кенә шөғөлләнә башланым. Әгәр ҙә профессиональ спортҡа иртәрәк килгән булһам, бөгөн тағы ла юғарыраҡ уңыштарға өлгәшкән булыр инем. Әммә үкенеп ултырырға ваҡыт юҡ - үҙемде йәш спортсылар әҙерләүгә тулыһынса бағышлағанмын, шуның менән йәшәйем. Үҙемдән сығып, уҡыусыларыма гел шуны әйтәм: яңылыш юлға баҫыр өсөн бер генә аҙым етһә, спортҡа килер, хатта унда уңыш ҡаҙаныр, үҙеңдең физик торошоңдо тейешле кимәлдә тотор өсөн айҙар, йылдар буйы шөғөлләнеү талап ителә.

**➔ Бөгөндән алып сәләмәт тормош башлайым, тигән кеше өсөн ниндәй ҡыйынлыҡтар килеп тыуа һәм уларҙы нисек йырып сығырға?**

- Минеңсә, спортҡа килеүе ҡыйын түгел, быны өсөн бары тик үҙ уйҙарыңды, теләктәреңде бер нөктәгә - сәләмәтлеккә йүнәлтергә генә кәрәк. Йөрөй-йөрөй, спорт кешенең "ауырыу"ына әйләнә лә ҡуя: унһыҙ йәшәй алмай башлайһың. Тәүге ике көндә үҙеңде мәжбүр итһәң, артабан теләк барлыҡҡа килә. Шуныһы ҡыҙыҡ, бер көн генә күнекмәне ҡалдырһаң да, кәүҙәңдә ниндәйҙер ауырлыҡ һиҙәһең, хәлһеҙ, шаңҡыған кеүек йөрөйһөң. Өйләнгән кешегә лә ҡамасауламай ул - киреһенсә, спорт менән шөғөлләнгән ғаилә ағзаһы күберәк эштәр эшләргә өлгөрөргә тырыша һәм шуға өлгәшә.

**➔ Үҙеңә спорттың тағы ниндәй төрҙәре оҡшай?**

- Әлеге ваҡытта волейболын да, баскетболын да, теннисын да уйнайым, студенттар менән бергә саңғыла ла йөрөйөм, гер күтәреү менән дә мауығам. Теләгең бар икән, спорт һиңә бер ваҡытта ла ҡаршылашмай - үҙеңә генә ҡарышмаҫҡа кәрәк.

**➔ Спорт менән шөғөлләнеүҙең тағы ниндәй ыңғай яҡтары бар?**

- Беҙҙең колледжда үткән барлыҡ мәҙәни сараларҙа спортсылар ихлас ҡатнаша. Сөнки, спортсыларға ғына хас булған ярыш сәме, рух сәхнәлә лә юғалып ҡалмаҫҡа ярҙам итә. Спортсы һәр ваҡыт тиерлек үҙенең дәғүәсеһе тарафынан физик һәм рухи ҡаршылыҡ менән осраша. Сәхнәгә сыҡҡанда ла шундай уҡ ҡаршылыҡ тоя ул, әммә хатта дәғүәсеһе алдында ла ҡаушамаҫҡа күнеккән спортсы бирешмәй. Ярыштарҙа сыныҡҡан булыу шулай тормошта ла ярҙамға килә. Шуның өсөн генә лә спорт менән шөғөлләнергә була. Үҙемә лә 2007 йылда "Салауат йыйыны"нда ҡатнашырға һәм еңеп сығырға тура килде. Тағы ла, спортсы булыу бары тик ярыштарҙа ғына түгел, ул һәр ваҡыт ярҙамға килә. Әйтәйек, урамда тайып йығылғанда ла ярҙам итә был, һәр хәлдә, спортсылар араһында йәрәхәт алыусылар һирәгерәк.

Ниндәй төр менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә, яҡшыға, бары спортсының күңеленә генә яткан төр булһын. Һәр кеше, үҙ теләге менән шөғөлләнеп, 1-се разрядлы спортсы нормативын үтәй алмаһа ла, имәндәй ныҡ, сәләмәт була, матур балалар тәрбиәләй ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙ сәләмәтлекте һаҡлау өсөн эшләнәсәк эштәрҙең барыһын да иртәгәгә ҡадырабыҙ ғәҙәттә. Бына әле лә арағыҙҙа:"Яңы йылдан һуң спорт менән шөғөлләнә башлайым!" — тиеүселәр барҙыр. Яңы йылдан һуң иһә был пландар онотола, сәләмәтлекте дауаханаларға йөрөп, төрлө дарыуҙар, витаминдар аша юллау дауам итә. Ә шулай ҙа: "Әйҙәгеҙ, яңы йылдан һуң ныҡлап тотонайыҡ әле спорт менән дәррәү шөғөлләнеүгә!" — тип мөрәжәғәт итәбеҙ гәзит уҡыусыларыбыҙға. Беҙҙең әйҙәләүҙе кем ҡолаҡҡа элер икән, белгебеҙ килә - хәбәр итегеҙ.**

**Илгиз РӘХИМОВ яҙып алды.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3, 4, 5, 6, 7 ғинуар "Маугли, джунгли китабы"** (Р. Киплинг), Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу менән шыршы тирәләй Яңы йыл әкиәте. Башлана 11.00, 14.00.

**4 ғинуар "Аты барҙың - дәрте бар"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**5 ғинуар "Артур+Нэнси"** (Ә. Дилмөхәмәтова), мәңгелек мөхәббәт йыры

**6 ғинуар "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим), трагедия

**7 ғинуар "Их, өс егет, өс егет, Азат, Азамат, Байегет!"**, театраль концерт

### М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театры

**"Аждаһаны кем уятыр?"**, Яңы йыл тамашаһы. **2, 3, 6, 8 ғинуар** - башлана 12.00, 14.00, 16.00; **4, 5, 7 ғинуар** - башлана 12.00, 14.00.

**7 ғинуар "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т.Миңнуллин), тамаша

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**"Яңы йылды кем ҡотҡарыр?" балалар өсөн тамаша**

**2 ғинуар**, башлана 13.00, 15.00

**3-4 ғинуар**, башлана 10.30, 13.00

**5-6 ғинуар**, башлана 10.30, 13.00, 15.00

**7 ғинуар**, башлана 10.30, 13.00

*ИҒЛАН*

Дәүләт бюджет учреждениеһына төҙөлөш буйынса **директор урынбаҫары, юрист, ғилми хеҙмәткәр** талап ителә.

Белешмә өсөн телефон: **272-77-43.**

*ХОККЕЙ*

# ЯҢЫ ЙЫЛ БҮЛӘГЕ - ЕҢЕҮ!

**Юлаевсылар Яңы йылды күтәренке кәйеф менән ҡаршыланы. Шулай булмай һуң! "Салауат Юлаев" командаһы ошо арала ғына өс еңеү яуланы! 23 декабрҙә юлаевсылар Новосибирск ҡалаһының "Себер" командаһын 7:4 иҫәбе менән ҡыйратты, ә 25 һәм 27 декабрҙә Алыҫ Көнсығыштың, йәғни Хабаровск ҡалаһының "Амур" командаһын 4:2 һәм 4:1 иҫәбе менән еңде. Яңы йылға шунан да ҙурыраҡ, иҫтәлеклерәк бүләктең булыуы мөмкинме һуң!**

"Салауат Юлаев" Новосибирскиҙың "Себер" командаһы менән 23 декабрҙә 4-се тапҡыр көс һынашты. Быға хәтлем юлаевсылар 2 мәртәбә еңелгәйне инде. Ә бына хәҙер шундай ҙур иҫәп менән реванш!

Юлаевсыларҙың "Себер" командаһы менән 4-се тапҡыр осрашыуы үтә көсөргәнешле һәм әйтеп килештерә алмаҫлыҡ мауыҡтырғыс булды. Уйын башланып өлгөрөр-өлгөрмәҫтән Денис Платонов иҫәпте асып та ҡуйҙы. Ә "Себер" бер-нисә минут эсендә яуап ҡайтарҙы. Беренсе осор аҙағында Игорь Радулов ҡунаҡтар ҡапҡаһына икенсе шайбаны сәпәне. Өсөнсө осорҙа юлаевсылар уйын дилбегәһен тулыһынса үҙ ҡулдарына алды. Тәүҙә Александр Радулов көйәрмәндәрҙе өсөнсө гол менән ҡыуандырҙы. Унан һуң Игорь Мирнов иҫәпте 4:1, ә Мирослав Блатяк 5:1 итте. Ҡунаҡтар иһә бер шайба менән генә яуап ҡайтара алды.

Өсөнсө осор башланыу менән "Себер" көслө һөжүм ойоштorҙо, ә майҙан хужалары, киреһенсә, тыныслана төшкәйне. Һөҙөмтә көттөрмәне. Ҡунаҡтар хатта иҫәпте 5:4-кә еткерҙе. Былай булһа, еңелеүең бик мөмкин. "Салауат Юлаев" уйынды йәнә ҡыҙыулатты. "Себер" ҡапҡаһы алдында йыш ҡына "ҡойон" уйнаны. Александр Радулов 6-сы, Мирослав Блатяк иһә 7-се гол индерҙе. Матч, шулай итеп, 7:4 иҫәбе менән тамамланды.

"Амур" менән көс һынашыуҙың юлаевсылар өсөн ярайһы уҡ ауыр буласағын алдан уҡ самаларға мөмкин ине. Алыҫ Көнсығыш хоккейсылары яңы сезонды бик уңышлы башланы. Улар оҙаҡ ваҡыт Көнсығыш конференцияла беренсе урынды биләне. Тик һуңыраҡ ҡына бер аҙ сигенә башланы. Яралы януар икеләтә хәүефле, тигән әйтем бар. Тимәк, хәҙер айырыуса һаҡ булырға кәрәк!

"Салауат Юлаев" осрашыуҙы иң тәүҙән үк көслө, дәррәү һөжүм менән башланы. Команданың яңы уйынсыһы Сергей Сентюжин беренсе булып иҫәп асты. Олег Сапрыкин иҫәпте икегә еткерҙе. Беренсе осор шулай 2:0 иҫәбенә тамамланды. Икенсе осорҙа ҡунаҡтар уйынды яҡшырта төштө. Әммә улар майҙан хужалары ҡапҡаһын "аса" алманы. Бары тик өсөнсө осорҙа ғына тәүге шайбалары юлаевсылар ҡапҡаһына эләкте. Ә Александр Радулов бер-бер артлы ике голдың авторы булды. Алыҫ Көнсығыш хоккейсылары осор ахырында ғына икенсе шайбаны юлаевсылар ҡапҡаһына сорғотто.

"Амур" икенсе тапҡыр көс һынашыуҙы уңышлы башланы, үҙ ҡапҡаһын яҡшы һаҡланы. Беренсе осорҙа һәр ике яҡтың береһе лә иҫәп аса алманы. Тик икенсе осорҙа ғына юлаевсылар алға сыҡты. Өсөнсө осорҙа "Амур" майҙан хужалары ҡапҡаһына тәүге шайбаны индерҙе. Ул ҡунаҡтарҙың беренсе һәм һуңғы шайбаһы булды. Юлаевсылар "Амур" ҡапҡаһына йәнә ике шайба ҡундырҙы. Игорь Мирнов һәм Игорь Радулов һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡасыһы тота алманы. Икенсе осрашыу шулай уҡ юлаевсылар файҙаһына 4:1 иҫәбе менән тамамланды.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

# ДОНЪЯҒА - УЛАР КҮҘЕ...

## улар һүҙе менән

**Яңы йылдың иң могжизәле байрам икәнен онотоп, йыл ахыры менән бәйле мәшәҡәттәргә күмелеп, мөғжизә көтөүҙән дә туҡтайбыҙ һәм үҙебеҙҙе күп нәмәнән мәхрүм итәбеҙ икән дәһә беҙ, өлкәндәр. Яңы йыл байрамын көтөү - үҙе үк ысын байрам, ти Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының 1-се "б" синыфы уҡыусылары - Арыҫлан ТИМЕРОВ, Алтынай ИСХАҠОВА, Әҙилә БАЙЕГЕТОВА. Байрам мәлендә балалар менән нимә тураһында һөйләшергә була һуң? Әлбиттә, ҡыш, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу, бүләктәр тураһында инде.**



**➔ Донъяла ысын Ҡыш бабай, Ҡарһылыу бармы ул? Әллә Яңы йыл байрамында кешеләр улар булып кейенеп, ҡыланып йөрөймө?**

**Арыҫлан:** Ысын Ҡыш бабай бар, тик мин уны әлегә күргәнем юҡ. Сер итеп кенә әйтәм, мин Ҡыш бабайҙың осоп йөрөгәнен генә күргәнем бар. Бәләкәй саҡта, балалар баҡсаһына йөрөгән мәлдә, тышҡа сыҡҡайным, шунда ҡапыл ғына уның осоп киткәнен күреп ҡалдым. Йөк машинаһында ине Ҡыш бабай, машинаһы һары, юҡ, йәшел төҫтә ине.

**Әҙилә:** Ҡыш бабайҙар бит машинала йөрөмәй, улар боландар егелгән санала йөрөй. Мин бер йәнһүрәт ҡарағайным, шунда күрҙем.

**Арыҫлан:** Минеке ысын Ҡыш бабай булмаған инде улай булғас. Китапта күргәнем бар шул уның санаға ултырып йөрөгәнен.

**Алтынай:** Минең дә ысын Ҡыш бабайҙы күргәнем юҡ, балалар баҡсаһына Ҡыш бабай булып кейенгән йырсылар ғына килә торғайны. Моғайын да, Ҡыш бабай бер үҙе өлгөрмәй, шуға ҡайһы бер ағайҙарға тунын бирә лә, Ҡыш бабай булып торорға ҡушалыр...

**Әҙилә:** Ысын Ҡыш бабай төньяҡта йәшәй. Уның өйөндә йыл буйына шарҙар, гирляндалар эленеп торалыр инде. Йыл буйына Яңы йыл! Тик улай байрамдың ҡыҙығы бөтмәйме икән?

**➔ Ҡарһылыу ҡайҙа йәшәй һуң улай булғас? Ҡарһылыуҙарҙың да ысыны, ысын булмағаны буламы? Ҡыш бабайға Ҡарһылыу нимәгә кәрәк?**

**Алтынай:** Ҡарһылыу - Ҡыш бабайҙың ҡыҙы.

**Әҙилә:** Йәки ейәнсәре, ул Ҡыш бабай менән бергә, төньяҡта йәшәй.

**Арыҫлан:** Ысын Ҡарһылыуҙы ла күргән юҡ былай. Бына Мәскәй әбейҙе күргән бар. Мин йөрөгән балалар баҡсаһында беҙҙең уҡытыусы Мәскәй әбей булып кейенде лә, һеперткегә ултырып, ысынлап осто ла китте.

**Алтынай:** Ҡыш бабайға бүләктәр һалынған тоҡто һөйрәп йөрөүе ауыр, шуға уға ярҙамсы кәрәк. Ҡарһылыу шундай ярҙамсы була.

**Әҙилә:** Балалар күп булһа, Ҡыш бабай яңылышып, ҡаңғырып китмәһен тип, ҡарап йөрөй ул Ҡарһылыу. Нимә тиһәң дә, бабай ҡарт бит инде.

**Арыҫлан:** Ҡарһылыу ҡыҙ кеше лә инде. Ә ҡыҙҙарҙан ауыр сумка күтәртергә ярамай. Әсәйҙәргә лә. Унан, Ҡыш бабай көслөрәк тә, нимәгә уға ярҙамсы? Ул бөтөн ерҙе, ағастарҙы, кешеләрҙе өшөтә ала, үҙе һыуыҡтарға бирешмәй, ныҡ тора.

**Алтынай:** Беҙҙең балалар баҡсаһында тәрбиәсебеҙҙең ҡыҙы Ҡарһылыу булып кейенде. Ҡарһылыуға ныҡ оҡшаһа ла, беҙ уны барыбер таныныҡ. Ул апай ысынлап та Ҡарһылыуға оҡшап тора, бите ап-аҡ ҡына.

**➔ Ә Яңы йыл байрамы килгәнен ҡайҙан беләһегеҙ?**

**Әҙилә:** Сәғәттәр башҡа көндәрҙә тыптыныс эшләһә, был байрам ваҡытында улар тауышланып, һуға башлай. Шунан мин байрам килгәнен беләм.

**Алтынай:** Яңы йыл ҡар яуғас була. Ҡар яуһа, мин шунда уҡ байрамды көтә лә башлайым.

**Арыҫлан:** Мин йылдың айҙарын беләм, декабрь бөтһә, яңы йыл етә. Уҡымаған саҡта ла айҙарҙың исемдәрен белә инем. Мин инглиз телендә унға тиклем һанай ҙа беләм.

**➔ Ҡышын нindәй уйындар уйнарға яратаһығыҙ?**

**Арыҫлан:** Ҡар бөрешеп, ҡарҙың өҫтөнә һикереп уйнарға яратам. Беҙҙең синыфта өс Арыҫлан бар: мин, Таймасов, Зәйетколов. Беҙ гел бергә уйнайбыҙ. Хәтәр ҡыҙыҡ ул, мин, Арыҫлан, тип әндәшһәм, ике Арыҫлан бер юлы әйләнеп ҡарай, Арыҫлан, кил әле, тиһәм, икеһе лә йүгереп килә, йәтеш!

**Әҙилә:** Ә Тимеров Арыҫланды башҡа Арыҫландарҙан нисек айырабыҙ, беләһегеҙме? Ул сәсен матур итеп йөрөтә. Әллә нисек итеп, һылап, өҫкә ҡаратып, мөгәҙ һымаҡмы итеп ҡуя. Уның ағаһы ла сәсе менән булышырға ярата, бер тапҡыр ул әтәстең кикерегенә оҡшатып, сәсен хәтәр ҡыҙыҡ итеп өҫкә ҡаратып килгәйне мәктәпкә.

**Алтынай:** Тауҙан санала шыуабыҙ. Минә ҡышын ҡар бабай яһау оҡшай. Тағы ла бер ҡыҙыҡ уйын уйлап сығарғайным. Өйҙә банкаға һыу һалаһың да, уны тышҡа һыуыҡҡа сығараһың. Һыу туңа ла, боҙ йәйләп ҡына ҙурая бара һәм банканы яра.

**Арыҫлан:** Теге юлы беҙ Искәндәр менән тотоноп торҙоҡ та, ҡыҙҙарҙы тауҙан ҡолатып, тәгәрәтеп бөттөк, хәтәр ҡыҙыҡ булды. Ҡышын ауылда булғанда мунсанан сығып, ҡарға ырғырға була.

**➔ Әсәйҙәр йыл буйына һеҙҙе шаярыуҙан тыйып, тыңлашмаһаң, Ҡыш бабай бүләк алып килмәй, тип әйтеп кенә тора. Ысынында ла Ҡыш бабай тыңлаусан балаларға ғына бүләктәр алып киләме?**

**Арыҫлан:** Эйе, сөнки ул үҙе һәйбәт бабай. Шуға тыңлаусандарға ғына бирә бүләкте. Ә Ҡыш бабай үҙе малай булғанмы, тиһегеҙме? Нисек инде ул малай булһын, ул бит бер йәштә генә була, ҡартаймай ҙа, шуға ла малай булмағандыр ул, баштан уҡ бабай булғандыр. Ябай кешеләр улай булмай, бына мине ҡартаймай тик тора тип уйлайһығыҙмы әллә?

**Алтынай:** Ул аҡыллыларҙы ғына ярата.

**Әҙилә:** Аҡыллыларҙы ярата, етмәһә, уға бит бейеп, йырлап, шиғыр һөйләп күрһәтергә кәрәк. Шунан ғына бирә ул бүләген.

**➔ Ә һеҙ үҙегеҙҙе яратаһығыҙмы, үҙегеҙҙең ҡайһы яҡтарығыҙ оҡшай һәм ҡайһы яҡтарығыҙ оҡшамай?**

**Арыҫлан:** Мин үҙемде ныҡ яратам. Былай мин ҙаллы ғына ул, әсәйҙәр аҡса бирһә, кәрәк нәмәне үҙем һатып алам. Урамда ла үҙем генә сығып йөрөп киләм.

**Алтынай:** Мин үҙемде ярататммы икән, белмәйем, тик бына ауылдарымды ныҡ яратам. Уларҙың берәһе - Яңы Ҡул, икенсеһе - Ҡаранйылға. Унда йәшәгән олатай-өләсәйҙәр беҙҙе ярата. Әсәй менән атай ҙа ярата беҙҙе, шул еткән инде.

**Әҙилә:** Ҡыҙ кеше үҙен яратырға тейеш. Ул тыңлаусан да булырға тейеш, шунһыҙ әсәйҙәр яратмай. Бына мин ҡайһы саҡта өйҙә туҙҙырам да, кире йыйып ҡилмәй, шунан әсәйем минә көйә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Яңы йыл, ысынлап та, бәләкәстәрҙең дә, өлкәндәрҙең дә яратҡан байрамы, тик беҙ был турала уйларға ғына онотабыҙ. Күңелегеҙҙә могжизәләргә урын ҡалмаған икән, бөгөнгө геройҙарыбыҙға, үҙегеҙҙең балаларығыҙға ҡарағыҙ һәм донъяны уларҙың һәм уларҙың әкиәттәре персонажлары күҙҙәре аша күрергә өйрәнегеҙ. Нисә йәштә генә булмаһын, бөтөн кешеләр ҙә бәхет көтөп йәшәй, ни өсөн ошо тойғоға тормошҡа ашырға ярҙам итмәскә? Ә һеҙ могжизәләргә әҙерме, дуҫтар?**

Ләйсән ДАЯНОВА
әңгәмәләште.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҘЕ УҪАЛДАН...

## ситкә ҡас

Ярлы булһаң, дуҫ ҡаса, ҡарый булһаң, ырыҫ ҡаса.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Был донъяла башҡарылған бар эштәр өмөт ярҙамында тормошҡа атҡарылған.

**(Мартин Лютер).**

Көсһөҙ кешеләр һәр саҡ уңайлы мәл көтә, ә көслөләр ул мәлде үҙҙәре тыуҙыра.

**(Максим Горький).**

Әсә һөйөүенә сорналып үҫкән кешене енеүсе тойғоһо һәм уңышҡа ышаныу ғүмер буйы оҙата бара.

**(Зигмунд Фрейд).**

Алыҫ киләсәктә буласаҡ ауырлыҡтар тураһында уйламаған кешене... яҡындағы күңелһеҙлектәр һағалап тороусан.

**(Конфуций).**

Маҡсатҡа барып етмәйенсә, эшенде ташлап ҡуяһың икән, тимәк, һин - ялҡау. Ялҡау кеше бер ваҡытта ла еңеү яуламай, ә еңеүсе кеше бер ваҡытта ла ялҡау булмай.

**(Наполеон Хилл).**

Ҙур булмаған өлөштәргә бүлеп эшләһәң, бер эш тә ауыр тойолмай.

**(Генри Форд).**

Үҙеңде бәхетле тояһың икән, ни өсөн бәхетле булыуыңды берәмтекләп тикшермә. Был күбәләктең матурлығын тикшереү өсөн уны өлөштәргә бүлеүгә тиң булыр ине.

**(Паоло Мантегацца).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бик ҙур аҡыл туплаған бер кеше һәр ерҙә "Мин үҙ яҙмышыма үҙем тәьҫир итә алам" тип ҡабатлай торған булған. Быны бер саҡ яҙмыш ишетеп ҡалған һәм был аҡыл эйәһенең арт һабағын уҡытырға ҡарар иткән. Ул ҡарт, ауырыу ҡарсыҡ һынында әлеге аҡыл эйәһе янына килгән.**

**-Һаумы, аҡыллы кеше, - тигән ҡарсыҡ.- Мин һинең яҙмышың, ә ҡулымдағы ҡапсыҡта һинең йәнең. Хәҙер әйт инде: йәнең минең ҡулда була тороп, һин нисек минә, яҙмышыңа, тәьҫир итә алаһың?**

**Аҡыл эйәһе оҙаҡ уйлап тормаған, бер таяҡ эләктереп алған да, ҡарсыҡтың башына һеңгәҙәтә һуҡҡан һәм ҡулынан йәне һалынған ҡапсыҡты тартып алған. Һәм шулай тигән:**

**-Һәр ваҡыт өсөнсө юл табып була...**

**Шунан аҡыл эйәһе ҡапсыҡты ярыны аша һалып, үҙе һайлаған юлдан киткән. Ул бына шулай үҙ яҙмышына үҙе хужа булып була икәнен иҫбат иткән..."**

4 607007 170015 (barcode)

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 гинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 5213
Заказ 14